7985

1726-02

# НАРСПИ

7985

К. Иванов

# Нарспи





7985

К. Иванов

# Нарспи

Башкортостан
китап издательствоһы
Өфө · 1960

Тәржемәсеһе
РАХМАН КӘЛИ
МОСТАЙ КӘРИМ
редакцияһында

## Ҡ. В. ИВАНОВ

*(1890—1915)*

Атаҡлы сыуаш шағире һәм сыуаш халҡының әҙәби теленә нигеҙ һалыусы Константин Василий улы Иванов Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙе, Слакбаш ауылында 1890 йылдың 27 майында крәҫтиән семьяһында тыуа.

Константин Иванов, ауыл мәктәбен тамамлағас, Бәләбәй училищеһенә уҡырға инә. Ләкин кесе йәшенән иғтибарлы, йомшаҡ күңелле, хәтер һаҡлаусан балаға был мәктәптәге ваҡ милләттәргә булған насар ҡараш бик ныҡ тәьҫир яһай. Ошо сәбәптән ул училищела бер йыл ғына уҡый ҙа икенсе йылда унда барыуҙан баш тарта.

1903 йылда Иванов Семберҙә сыуаштар өсөн асылған уҡытыусылар семинарияһының әҙерлек курсына инә. Ике йылдан һуң, әҙерлек курсын тамамлап, семинарияның үҙендә уҡый башлай.

Бәләбәй училищеһендәге шикелле үк, Сембер семинарияһында ла батша Россияһының кешене кәмһетә торған ҡара закондары хөкөм һөрә. Был ҡыҫымға түҙә алмаған сыуаш балалары 1905—1907 йылдарҙағы дауыллы революцион күтәрелеште ҡайнар күңелдән ҡотлайҙар һәм ҙур шатлыҡ

менән революцион сығыштарға ҡатнашалар. Уҡыусылар араһындағы революцион сығыштарға етәксе-лек иткән кешеләрҙең береһе Константин Иванов була.

Ошо революцион сығыштар өсөн 1907 йылда Иванов революцион фекерле башҡа семинаристәр менән бергә «бер уҡыу йортона ла алмау» шарты менән мәктәптән ҡыуыла.

Константин Иванов, инде белем алыуға ышанысын юғалтып, үҙ ауылына ҡайта һәм күптән күнеккән крәстиән эше менән шөғөлләнә башлай. Ауылда Константин Иванов бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә сыуаш халҡының байтаҡ әкиәттәрен, йырҙарын, уйындарын, әйтем һәм башҡа төр фольклор өлгөләрен яҙып ала һәм уларҙы өйрәнә. Ул үҙенең ауылдаштары менән ныҡ аралаша, уйындарҙы, күңел асыу урындарын, туйҙарҙы мөмкин тиклем күберәк күрергә, булдыра алғанса яҙып алырға, иҫендә ҡалдырырға тырыша.

Шул уҡ 1907 йылда Семберҙәге инспектор И. Я. Яковлев сыуаш телендә дин һәм дәреслек китаптары сығарыуҙы ойоштора. Уға сыуаш һәм рус телдәрен белгән, әҙәби эшкә һәләте булған кешеләр кәрәк була. Ул Башҡортостандан килгән талантлы егет Константин Ивановты иҫенә төшөрә һәм тиҙ арала уны Сембергә саҡырып ала.

Константин Ивановҡа Яковлев сыуаш теленә китаптар тәржемә итеү һәм уларҙы баҫтырып сығарыу буйынса комиссияла эш тәҡдим итә.

Йәш шағир дәреслектәр сығарыу эше менән бергә Лермонтов, Огарев, Кольцов, Некрасов, Майков әҫәрҙәрен тәржемә итә. Классик әҙәбиәтте өйрәнә. Шул уҡ ваҡытта, үҙалдына уҡып, халҡ уҡытыусыһы исемен алырға әҙерләнә.

Константин Иванов тырышлыҡ менән халҡ уҡытыусыһы исемен ала, ләкин уға бер ерҙә лә эш бирмәйҙәр. 1907 йылда һалынған, «сәйәси яҡтан ышанысһыҙ» тигән тамға унан алынмағайны. Күп яфаланғандан һуң ғына 1910 йылдың октябрендә ул Семберҙәге сыуаш уҡытыусылар семинарияһы

эргәһендәге ике класлы ҡатын-ҡыҙҙар училищеһенә таҙа яҙыу һәм һүрәт төшөрөүҙән уҡытыусы итеп ҡабул ителә. Унда эшләй башлағас, Константин Иванов үҙенең ижад эшен тағы ла көсәйтергә уйлай, ләкин сәләмәтлеге һаман насарайғандан-насарая бара, эшләргә ирк бирмәй. Ул был уҡыу йортонда бары 1914 йылға тиклем генә эшләй ала.

Талантлы шағир, заманының ғәйәт культуралы кешеһе, сыуаш әҙәбиәтенә беренсе булып нигеҙ һалыусы Константин Василий улы Иванов ижади өлгөрөп еткән осорҙа ғына — 1915 йылдың 26 мартында аш ҡаҙаны һәм үпкә ауырыуынан үлеп китә.

Константин Ивановтың ижади мираҫы ҙур түгел. Уның мираҫында, әлбиттә, иң күренекле урынды «Нарспи» поэмаһы тота. «Нарспи» әҫәрендә автор хеҙмәт һөйгән һәм үҙенең кешелек хоҡуғы өсөн көрәшкән, тулы һулыш алып йәшәргә хаҡлы булған халыҡты яҡлап сыға.

Социаль тигеҙһеҙлектең кешеләргә килтергән ғәйәт ауыр трагедияһын кәүҙәләндергән «Нарспи» поэмаһы беренсе тапҡыр 1908 йылда «Сыуаштарҙың әкиәт һәм хикәйәттәре» йыйынтығында баҫылып сыға. Константин Ивановтың сәйәси яҡтан «тотанаҡһыҙлығын» иҫкә алып булһа кәрәк, әҫәрҙә авторҙың исем-фамилияһы күрһәтелмәгән була. Ләкин бер төркөм кешеләр поэманың кем тарафынан ижад ителгәнен яҡшы беләләр.

Поэмала нигеҙ итеп халыҡтың тел әҙәбиәтендә һөйләнеп килгән мәжүсилек (язычество) осороноң күренештәре һәм ваҡиғалары алына. Шул уҡ ваҡытта Константин Иванов, фольклор материалына таянып, бөтөнләй яңы, реалистик, тормошсан әҫәр ижад итә. Был әҫәрҙең донъяға сығыуын, сыуаш халҡының беренсе оригиналь әҫәренең тыуыуы тип, бик ҙур баһалайҙар. Сыуаш халҡының уй-тойғоларын, теләктәрен тәрән сағылдырған, халыҡсан тел менән иң тормошсан ваҡиғаларҙы тасуир иткән был поэма халыҡ араһына бик тиҙ тарала. Әҫәрҙең тиражы етерлек булмау арҡаһында уны Самар һәм Өфө губерналарында йәшәгән сыуаштар,

ҡулдан күсереп, өйҙән-өйгә йөрөтөп уҡыйҙар, бик күптәр ятлап алалар.

Поэманың геройняһе Нарспи — легендар образ. Ул матурлыҡ, сәләмәтлек, таҙалыҡ символы. Иванов, үҙенең поэмаһында христиан дине буйынса көсләп тағылған исемдәрҙе, ғөмүмән, алмай.

Константин Иванов был поэмала мөхәббәт ҡорбаны булған Нарспиҙең фажиғәһен күрһәтеү аша байлыҡ, ғәҙелһеҙлек, иҙеү хакимлегенә ҡаршы көслө протест белдерә, эшсән, ғәҙел, яҡшы күңелле сыуаш халҡына дан йырлай.

«Нарспи» поэмаһы 1941 йылда башҡорт теленә тәржемә ителеп, айырым китап итеп сығарылғайны. Ләкин подстрочник аша эшләнгән ул тәржемә тейешле художество кимәленә ирешә алмағайны. Шуға күрә поэманы өр-яңынан тәржемә итергә тура килде.

Был тәржемә, оригиналдан тыш, татар һәм рус телендә сыҡҡан иң һуңғы баҫмаларҙан файҙаланып эшләнде. Шулай итеп, 19 йыл үткәс, «Нарспи» поэмаһы башҡорт телендә уҡыусыға икенсе тапҡыр тәҡдим ителә.

*Тәржемәсе*

## I. СИЛБИ АУЫЛЫНДА

### 1

Март аҙағы*. Силбиҙә
Ҡыҙыу ҡояш нурҙары,
Энә һымаҡ, тишеп төштө
Ерҙең аҡ ҡар юрғанын.
Тауҙар, битләү урындар
Ҡарая, ҡары ирел;
Ҡояш көндө ҡыҙҙыра,
Үләндәр сыға үреп.
Һыуыҡ, уҫал ҡыш үтә,
Һыҡтап илай, моңлана,

* Оригиналда «Буш ай» — сыуаштар элек яҙ айының бер ваҡытын шулай атағандар. «Эштән буш ай», хәҙерге март айына тура килә.

Түгә боҙло йәштәрен,
Гөрләп аға йылғалар.
Һыуҙар таша, гөр килә:
«Илама,— тиҙәр ҡышҡа,—
Илаһаң да үтәһең,
Ҡояш ҡыҙыуы ҡуша».
Ҡыштың йәше, шаулашып,
Аҡты йылғалар булып.
Бала-саға гөр килеп,
Саба урамдар тулы.

2

Килде көләс, йәмле яҙ,
Килде, сәсте йылыһын.
Ҡояш көлдө, донъяның
Асты ҡышҡы йоҡоһон.
Ҡара урман уяныт,
Йәшел кейем кейенә.
Йәшелләнә киң ҡырҙар,
Йәмен сәсеп һөйөнә.
Аллы-гөллө сәскәнән
Татлы хуш еҫ бөркөлә.
Урмандарҙа, ҡырҙарҙа
Аҫыл ҡоштар гөр килә.
Болоттарҙан юғары
Ҡүктә һайрай буҙтурғай.
Үлән өҫтөндә бәрәс
Уйнай, шатланып ырғый.
Борғо уйнай моңайып,
Ҡөтөү көтөүсе малай.
Ул асыҡҡан моғайын,
Силби яғына ҡарай.

3

Силби ауылы — бай ауыл,
Йәмле урман ҡырында.
Контор* һымаҡ шәп өйҙәр
Өйәңкеләр аҫтында.
Ауыл яңы кәртәле,
Кәртәһе — яңы ситән.
Уҙған йылғы кәбәнле
Ырҙындар теҙелеп киткән.
Урамдар киң, өйҙәр ҙә
Таҡта менән ябылған.
Йәшелгә күмә баҡса
Урамды ике яғынан.
Тирә яҡ, таш диварҙай,
Ҡойма менән уралған.
Һары ҡапҡа йорт һайын
Түбәләре һырланған.
Силби ауылы — ҙур ауыл,
Ҡала һымаҡ, алыҫтан,
Байлыҡтан да, күрәһең,
Ҡаланан ул ҡалышмай.

4

Шаулап аҡҡан ҙур йылға
Данлы ауылды урай.
Көҙгөләй һыу өҫтөндә
Йымылдап нурҙар уйнай.

---

* Контора — революцияға тиклем йәшәгән кешеләрҙең ҡарашынса, ҙур һәм матур өй — ҡаласа эшләнгән өй.

Ҡук болоттар әйләнә
Төбөндә тоноҡ һыуҙың.
Өйәңке ҡарай үҙенең
Һыу өҫтөндәге һынын.
Бына күпер. Өҫтөндә
Ҡармаҡ һала бер бабай.
Йылғыр йылтыр балыҡты
Селәүсен менән алдай.
Бата-сума батҡаҡта
Ана шаян балалар
Шул балыҡсы бабайҙы
Үсекләргә баралар.
Ана берәү күперҙән
Сығып китте йылғаны,
Йылғаны сығыу менән
Ҙур урманда юғалды...

5

Сыуаш ауылы Силби
Йәннәт төҫлө тойола,
Сыуаштарҙың йөҙөнән
Шатлыҡ нуры ҡойола.
Ҡыҙҙар йыры, ҡош моңо
Яңғырап китә ҡырҙарға.
Йәндәр ирей, дәрт тыуа
Ошо яҙғы моңдарҙан.
Урам буйлап кешеләр,
Барин һымаҡ, баралар.
Өй артында, зыҡ ҡубып,
Уйнай шаян балалар.

Нар* һымаҡ гүзәл ҡыҙҙар
Аҡҡоштарҙай үтәләр.
Түштәрендә йылтырай
Сылтыр-сылтыр тәңкәләр.
Ер һелкетеп егеттәр
Бейей ҡапҡа алдында.
Тормош матур, бик матур
Оло Силби ауылында!

6

Юҡ кешенән көслөһө
Ошо яҡты донъяла.
Ерҙә, һыуҙа — һәр төштә
Хаким дә ул, хужа ла.
Ҡеше көслө, тик шуны
Еңә алмай аҙ ғына:
Аҡса менән араҡы
Уны юлдан яҙҙыра.
Бөйөк Ҡалым-аҙнала**
Сыуаш күпме эсмәгән?
Тәрән мөгәрәп эсенән
Күпме һыра күсмәгән?
Ашаныҡ та, эстек тә,
Бейенек тә, йырланыҡ:

* Нар — легендар образ, матурлыҡ, сәләмәтлек, таҙалыҡ символы. «Нарспи» исеменең «Нар» менән башланыуы ла ошо символға бәйле булырға тейеш.

** Ҡалым аҙнаһы — сыуаштарҙың мәжүсилектән ҡалған яҙғы байрамы. Ул бер аҙна була.

«Аяҡ тибеп эсмәгәс
Байрам-байрам буламы?»
Ҡис етһә лә, кешеләр
Һаман йөрөй урамда.
Эскән шау-шыу эңерҙә
Яңғырап бара урманға.

7

Эсә-эсә көн буйы
Сыуаш тамам күбенә,
Яҫтыҡ итеп батҡаҡты,
Төкөрөп ята күгенә.
Ята сыуаш бариндәй,
Ял итергә шәп урын
Бар урамды бер итеп,
Баҡыра ул үҙ йырын:
— Күп эшлә лә, күп аша,
Ҡаты тирлә, эс ҡаты!
Эскән өсөн әрләргә
Берәүҙең дә юҡ хаҡы!
Ҡәрәк саҡта эшләйбеҙ,
Ҡәрәк саҡта эсәбеҙ,
Өйҙә бөтһә — эсергә —
Күршеләргә күсәбеҙ.
Күршелә эске бөтһә,
Айран яһап эсәбеҙ;
Әгәр айран да бөтһә,
Бирер Туры*, көтәбеҙ!..

---

* Туры — алла, хоҙай.

Ҡалым үтә, ҡар китә,
Ваҡыт яҙғы һабанға.
Ә сыуаштар көнө-төнө
Эсә әле һаман да.
Ваҡыт һеҙгә торорға,
Әй, туғандар, туғандар!
Ваҡыт инде айнырға,
Сәсеүгә көн тыуғанда!
Аттар егеп, геүләтеп,
Һабан һөрөр көндәр бит.
Иген сәскән ҡырҙарҙа
Ер тырмалар көндәр бит.
Эй, ағайҙар, тороғоҙ,
Барын-юғын барлағыҙ
Эрәтләгеҙ һуҡаны,
Әҙер булһын арбағыҙ!
Йыуын һалҡын һыу менән,
Бит-йөҙөңә йәм керер.
Ныҡлап туйҙыр тамаҡты,
Ер һөрөргә көс бирер.
Тиҙерәк ат егегеҙ,
Көнө йылды туйҙыра!
Әй, хоҙайым, һаулыҡ бир,
Уңыштарҙы бир, хоҙа!

## II. НАРСПИ

1

Үҫә һары бер сәскә,
Ә тирәлә гел сиҙәм;
Шулай үҫә Силбиҙә
Нарспи тигән бер сибәр.
Ҡырҙың һары гөлөндәй*,
Һоҡланырлыҡ йөҙҙәре,
Ике ҡара төймәләй,

---

* Һары гөл (сәскә) — сыуаш халҡында һары төҫ — иң матур төҫ, матурлыҡ символы итеп йөрөтөлә. Оригиналда был бүлек «Һары ҡыҙ» тип атала. Ул Нарспиҙең матур ҡыҙ икәнен әйтә.

Уның ҡара күҙҙәре.
Бөҙрә толом остары
Билдәренә ишелә,
Атлағанда тәңкәләр
Сыңлағаны ишетелә.
Уның һәр бер ҡарашы,
Егеттәрҙе ярһыта,
Бер йылмайып ебәрһә,
Йөрәктәрҙе яҡтырта.
Ҡырҙың һары сәскәһе
Кемде генә ҡаратмаç?
Шундай һылыу, саф ҡыҙҙы
Ниндәй егет яратмаç!

2

Ҡояш байып бөтмәç үк
Битен йыуа, биҙәнә,
Кис уйынға сыҡҡанда,
Ҡыҙҙар шулай төҙәнә.—
Сың-сың көмөш, аçыл таш —
Шәлгемәһе* тағы ла,
Ҡыҙыл ебәк яулығын
Килештереп ябына.
Уйнағанда тауышы
Һандуғас тауышылай,
Сыңғырап китә һауа,—
Нарспи көлә шулай.
Таңдар атҡансы уйнап,
Һөйөндөрә йыр менән,

* Шәлгемә — хәситә, тәүәт.

Сулпан йондоҙо уға
Йылмайып ҡарай түбән.
Ҡайтҡас ата йортона
Тәрән йоҡоға тала.
Нарспи татлы төш күрә,
Йоҡола ла шатлана.

3

Иртүк тора, йыуына,
Ҡыҙ тотона эшенә;
Аҫыл ебәк еп менән
Ҡайып сәскә төшөрә,
Йөйөн йөйгә килтереп,
Йә ултыра тегергә:
«Ҡойроғо сүс ҡорос эт
Бер сыға ла, бер керә»*.
Ҡиндер һуҡһа ултырып,
Һоҫаларын уйната;
Йә ҡалтырсаһын алып,
Шүреләргә еп ҡата.
Битен йыуып ултырһа
Һике өҫтөндә бесәйе,
«Бесәй ҡунаҡ саҡыра!» — тип,
Әҙерләнә аш-сәйе.
Күҙ эйәрмәй ҡулына,
Ары-бире югерә,
Иҙән, һике йыуыла,
Бөтәһенә өлгөрә
Яҡшы булды тормошо

* Халк араһында ҡайыу ҡайыу, тегеү тегеүҙе шулай йомаҡлайҙар.

Үсеп буйға еткәнсе,
Ете яттың яусыһы
Хәбәр һалып киткәнсе.

4

Атаһы Михәдәрҙең
Байлығы сереп ята;
Нарспи менән мактана,
Ул кыҙын бик ярата.
— Кем бар минең кыҙымдай? —
Тип мактана атаһы.
Юкмы уның тәңкәһе,
Йәки купшы катаһы?
Силби ауылы мәңге лә
Ундай кыҙҙы күрмәгән!
Бер сыуаш та үҙ кыҙын
Михәдәрҙәй һөймәгән!
Нигә мохтаж Михәдәр?
Нимә юк һуң милкемдә? —
Миндә байлык аҙ тейеп,
Әйтә алмаҫ бер кем дә.
Һөт-май, катык, һыра, бал
Аҙмы ни һуң баҙымда;
Келәт тулы игенем,
Һанамайым барын да.

5

Дөрөҫ, һүҙҙә алдык юк:
Унда байлык шул кәҙәр —
Берәү ҙә юк унан бай,

Ауылда бер — Михәдәр!
Уның йорто шундай шәп:
Хайран ҡала бар ауыл!
Шундай бейек — ҡоймалар —
Осоп үтә алмаç тауыҡ!
Йорто тулы әйберҙәр,
Ҡәртә тулы мал-милк.
Ҡеләт-келәт игендәр,
Бура тулған ишелеп.
Арғымаҡтай аттарҙан
Өҙмәй бесән-һолоһон.
Малдары көр, мискәләй,—
Һәр кем әйтер быныһын.
Үрге остағы шул өй
Берәү бит ул үҙе лә.
Маҡтанһа ла ышанырлыҡ
Михәдәрҙең һүҙенә.

6

Бер тигән бай Михәдәр,
Маҡтанырға яратып,
Масленица * үткәс тә,
Ҡыҙын иргә яраштı.
Ошо туйҙы ауылда
Һәр кем көтә күҙ ҙә ҡаш.
— Хәтәр булыр туй, тиҙәр.—
Бай менән бай яраштҡас!
— Симек**, симек, йәһәт кил,—
Тип әйтмәгән әҙәм юҡ.

---

* Масленица — байрам.
** Симек — бер аҙналыҡ яҙғы байрам.

— Ҡүпме әле симеккә?
Инде түҙер әмәл юҡ.
Михәдәрҙең йортонда
Ҡыҙға бирнә тегәләр,
Маҡтанырлыҡ булһын тип,
Ярышып көс түгәләр.
Ләкин Нарспи матурға
Ҡайғы килде туйынан,
Ҡасып-боҫоп йәш түгә,
Сәтнәр сыҡмай уйынан.

7

Түбән ос ауыл ситендә,
Бәләкәй өй ултыра.
Шунда әсәһе менән
Йәш егет Сәтнәр тора.
Аҫыл егет Сәтнәрҙең
Шундай байлыҡтары бар:
Ҡарт ҡына бер әсәһе,
Бер арғымаҡ аты бар,
Байҙар эшен эшләрлек
Ҡулдарында көсө бар,
Дошмандарын еңерлек
Уттай ҡайнар үсе бар.
Шунан башҡа Сәтнәрҙең
Байлығы юҡ бер генә.
(Бел: Михәдәр уйламай ҙа
Ярлыға ҡыҙ бирергә!)
Тик Нарспи көнөн-төнөн,
Уйлай һөйгән Сәтнәрен,
Булыр туйға ҡайғырып,
Түгә әсе йәштәрен!

Үҫә ялбыр өйәңке
Бейек улаҡ янында.
Сәтнәр көтә Нарспиҙе
Шунда һәр көн таңында.
Көтә... Атын һуғара.
Ике күҙе һуҡмаҡта.
Югерә-атлай Нарспи
Һыуға килә шул саҡта.
Һыуға килә Нарспие,
Шылтырай пар күнәге,
Шатлығынан Сәтнәрҙең
Ярһып тибә йөрәге.
Нарспи килә. Алыҫтан
Нурлы йөҙө яҡтыра.
Бейек улаҡ янында
Көтә Сәтнәр, һаҡ ҡына.
Уның моңһоу күҙҙәре
Матур ҡыҙға төбәлә.
Һары мыйыҡ аҫтынан *
Йылы һүҙҙәр түгелә...
Ул ант итә Нарспигә:
— Һөйәм һине мәңгегә!
Ҡыҙ ҙа әйтә йөрәктән:
— Һөйгәнем,— ти,— һин генә!..

---

* Һары мыйыҡ, һары кеше — сыуашта гүзәл матурлыҡ билдәһе.

## III. СИМЕК КИСЕ

1

Сылтыр-сылтыр сылтырап
Һыуҙар аға улаҡтан,
Ул ҡояшта ялтырай,
Күҙгә кеүек, йыраҡтан.
Көмөш-мәрйән таҡыялы
Һоҡланғыс ҡыҙ һыу ала.
Ат эсергән егеттең
Йөрәгендә ут яна.
Өйәңкелә һандуғас
Сәсә бирә моңдарын,
Егет һөйләй ҡыҙына
Эсендәге моң-зарын:

— Нарспием, беҙҙе тәҡдир
Шулай мәхрүм итерме?
Яуыз дошман ят ергә
Һине алып китерме?
Ах, юҡтыр шул бәхетем.
Һинең атаң — бай кеше...
Ҡәмһенеү ҙә юҡһыныу —
Шулдыр фәҡир өлөшө.

2

— Үпкәләмә, Сәтнәрем,
Зарланып ни файҙа һуң?
Шул бай ата-әсәнән
Ҡасайым мин ҡайҙа һуң?
Ҡапыл ала күҙ нурын,
Ҡояш төшһә көҙгөгә.
Шулай тондо байлыҡтан
Ата-әсәм күҙе лә.
Шул бай ата-әсәмде
Һис тә күндереп булмай.
Әйт, Сәтнәрем, нишләйек,
Нисек табырға уңай?
Бөгөн туйым башлана.
Ҡис, ҡояш байыу менән,
Күңелем һис бер тартмаған
Хужалки* байы менән.
Шундай яуыз дошмандан
Ҡотолоу мөмкин микән?
Сәтнәр, Сәтнәр, әйт зинһар,

* Хужалки — ауыл исеме.

Инде нишләргә икән?!
Бик үк йәштән яраттым,
Өҙөлөп һөйҙөм һине;
Ҡауышыр саҡ еткәндә,
Низәр күрәбеҙ инде?

3

— Ҡурҡыу белмәҫ башым бар,
Бар ялҡынлы йөрәгем,
Бар бер ҡортҡа-әсәйем,
Бар бер атым — зирәгем.
Иң ҡәҙерлем, һөйгәнем
Һин бар — яҙмыш ҡушҡаным,
Нишләйек һуң, һине лә
Алмаҡ була дошманым.
Ул залимде еңерлек
Миндә көслө ҡул да бар,
Ләкин унан да яуыз,
Яманыраҡ — донъялар.
Әгәр риза булһаң һин,
Ултыртам да шул атҡа,
Ҡош шикелле, осорбоҙ
Күҙ күрмәҫлек йыраҡҡа!

4

— Ҡит тиҙерәк, Сәтнәрем,
Бер ҡатын һыуға килә!
Йәнем, һүҙем бөтмәне,
Ах, йөрәк ярһып тибә!
— Хуш, һөйгәнем, меҫкенеңде

Иҫендә тот саҡ ҡына!
... Ат атылды, уҡ шикелле,
Туҙып ҡалды саң ғына.
Нарспи, сумып ҡайғыға,
Ҡарап торҙо артынан,
Сәтнәр осто, әй осто ул,
Буйлап ятып атына.
— Һау бул,— тине,— Нарспи,
Онотмам һине, иркәм.
Һинән башҡа, ят ҡулында
Нисек йәшәрмен икән?..
— Ник ҡайғыраһың, Нарспи,
Әллә кейәү бик ҡартмы?
Әллә бирнәң бик аҙмы? —
Тине әлеге ҡатын.
Нарспи һыу алып китте,
Уға яуап бирмәне;
Ҡайтып, өйгә ингәс тә,
Үкһеп илап ебәрҙе...

5

Өйҙә әсә пыр туҙа,
Мәшәҡәт ҙур, әйтмә лә,
Ә ҡурала Михәдәр.
Туй көймәһен* этмәләй.
Ҡөн буйына шаҡ та шоҡ,
Иҫең китер ҡартыңа,
Тиргә батып тырыша,

* Көймә — тантаналы көндәрҙә, туй, байрамдарҙа егә торған ябыҡ, биҙәлгән арба-кибитка.

Иркә ҡыҙы хаҡына.
— Сабый саҡтан иркәләп,
Буйы еткән баламдың
Хөрмәтенә ошо эш —
Инде булһын аҙағы.
Буйға үҫеп етте ҡыҙ,
Тинек, бай, ир табылһын;
Бай ире лә табылды.
Көймәһе яҡшы булһын!
Бына етте симек тә.
Туй ғүмергә бер килер
Ағай-эне йыйылғас,
Кискә мәжлес гөр килер!..

6

Михәдәрҙең баҙынан
Сығарыла мискәләр,
Күпме һыра, күпме бал,
Күңел дә киң, эс кенә.
Туйға килгән ҡунаҡтар,
Мискәгә ҡарап ҡуя.
Ҡай берәүҙәр, сыҙаша алмай,
Иренен ялап ҡуя.
Күркәһе, ҡаҙ, өйрәге,
Балығы, ите бешә.
Тәмле-тәмле аш еҫенә
Халҡтың иҫе китә.
Ҡара өйҙә шоборсо*
Шоборон тора көйләп,

* Ш о б о р — сыуаш халҡының музыка ҡоралы, ш о б о р с о — щоборҙа уйнаусы.

Тышҡы яҡта әҙерләнә
Бейергә егет-елән.
Туй көтәләр. Бөтәһе
Дәртле, етеҙ ҡуҙғала.
Бер кем һиҙмәй: ғазаплана
Яңғыҙ ҡалған ҡыҙ бала.
Нарспи ултыра келәттә,
Яңғыҙ, уйлы, ҡайғылы.
Ах, туй уның йөрәгенә
Һалды бөтмәҫ ҡайғыны!

7

«Ете яттан килде ят,
Килде яуыз яусылар.
Мин — йәш ҡыҙҙы алдылар
Ҡарт кейәүгә яусылап.
Атай-әсәй, туҡтағыҙ,
Бер генә йыл көтөгөҙ!
Мин — балағыҙ! Аңлағыҙ,
Зинһар... харап иттегеҙ!
Атам, әсәм иҫергән,
Ҡолаҡ һалмай һүҙемә.
«Кейәү бай ҙа бай»,— тиҙәр,
Ҡарамайҙар үҙемә!
Ғәжәп! Ҡарттар йөрәге —
Ҡатҡан кейеҙ киҫәге!
Ышанамын: «Йәш йән ул
Ыуыҙ ғына»,— тиһәгеҙ!
Йәнем булһа ҡош йәне,
Һайрар ҙа һайрар инем,
Ҡанатым булһа, йәшәргә
Зарһыҙ ер һайлар инем!..»

8

Ҡасты ҡояш, ҡыҙарып,
Ҡара урман артына.
Ҡөтөү ҡайта. Силбигә
Саң болото тартыла.
Ҡыҙ-ҡыrҡындар шаярышып,
Ҡөтөү ҡаршы алалар.
Ә йылғыр йәш егеттәр
Арттарынан сабалар.
Ана, мөңрәп, аҡ һыйыр
Һөҙмәк була сусҡаны.
Сусҡа сыйлай, халҡ шаулай,
Әйтерһең ут сыҡҡанмы.
Ҡөтөү уҙҙы урамдан.
Шул саҡ сәсәп, саң йотоп,
Туйға әйтә әсәһе,
Бер күнәк һыра тотоп.
Өс атлай ҙа туҡтала,
Күнәк ауыр, күрәһең,
Һыйлап туйға саҡырыу
Йола эше — күнәһең.

9

Туйға әйтте Михәдәр:
— Ҡилһен йәше, ҡарт-ҡоро!
Һыра тотоп, өй һайын
Йөрөп сыҡты ҡарсығы.
Һыйлап сыҡты өй һайын
Шулай нәҫел-нәсәпте,
Туйға ҡунаҡ саҡырҙы,

Үтәп йола-ғәҙәтте.
— Әй, ҡәрҙәштәр, дуҫ-иштәр,
Беҙҙе һаңға һанағыҙ!
Үрге оста олo туй,
Зинһар килмәй ҡалмағыҙ!
— Барырбыҙ, беҙ барырбыҙ,
Һаулыҡ бирһә бер хоҙа.
Ҡәҙер иткәс, рәхмәт ҙур,
Өмөттә торһон хужа.
Ауыл буйлап күп сапты,
Тик өй эшен хәтерләп,
Ҡайтты ҡарсыҡ. Ә хәҙер
Икмәк-тоҙон әҙерләй.

10

«Бөтә туған, дуҫ-иштәр,
Үрге осҡа барайыҡ!
Һыра ла күп, бал да күп,
Туя эсеп ҡалайыҡ!
Беҙҙең туған ҡыҙ бирә!
Ярты ауыл халҡына —
Гөрләп торған туй яһай,
Һөйгән ҡыҙы хаҡына,
Иҫке йола ҡушҡанса,
Туй башларбыҙ хәҙер ҙә,
Хәләл икмәк тоҙ менән
Мәрхүмдәрҙе хәтерләп.
Ҡарт инәйҙәр, бабайҙар,
Тыныс булһын йәннәттә.
Беҙҙең икмәк-тоҙобоҙ
Ризыҡ булһын йәндәргә!

Беҙҙең һөйгән Нарспигә
Рәхәт тормош бирһендәр.
Уның бәхет-шатлығын
Һаҡлаһын изге йәндәр!»

11

Мәрхүмдәрҙе иҫкә алғас,
Доға ҡылғас, күмәкләп,
Нарспиҙе эҙләп китте
Бөтә кеше келәткә.
Ата-әсә бер һауыт
Һыра тотоп атланы.
Улар барғас Нарспиҙең
Күҙҙәрен йәш ҡапланы.
— Нарспи, бул һөйкөмлө,
Иргә тура хеҙмәт ит.
Әйтмә уға ауыр һүҙ,
Тормошоңа күн дә кит.
Тыңла уны, йыуаш бул,
Башҡаларға сер һалма.
Йөҙөп эшлә, уңған бул,
Беҙҙең һүҙҙе тот, аңла!
Ата-әсә үгетләй,
Ҡыҙ йәш түгә, ҡыҙ илай.
Бик моңайып иңрәй шобор —
Башлана туй ошолай.

12

Силби батҡан тынлыҡҡа,
Бөтә халҡ йоҡлаған,

Урман, һыуҙар өҫтөнә
Нур һибеп, ай туҡтаған.
Ҡыҙҙар, егет-еләндәр
Арып тынды уйындан.
Тәгәрәште ҡунаҡтар
Нарспиҙең туйында.
Һалҡын төштө. Ыҫыҡтан
Еүешләнде үләндәр.
Тын. Шылт итмәй һалам да,
Бары йоҡлай, үлгәндәй.
Тик алыҫта яңғыҙ эт
Олоп ҡуйҙы, һаташып.
Әтәс йоҡо аралаш
Ҡысҡырырға маташты.
Инде урман артына
Ай ҙа батты тын ғына,
Ятты ергә һуҙылып,
Йоҡо атлы һын ғына.
Сыуаш йоҡлай, ҡайғыһыҙ,
Үлек һымаҡ. Тик бына —
Шул төн ғазап утында
Яна бер йәш ҡыҙ ғына...

## IV. ТУЙ

1

Таң һарғайыуы булды,
Төтөн баҫты ауылды.
Ҡояш әле сыҡмаған,
Сыуаш инде мунсала.
Симек көндө бар сыуаш
Мунса керә. Һәм бына
Симек үләне менән
Бүртенгәнсе сабына.
(Был ғәҙәт сыуаштарҙа
Борон-борондан ҡалған.
Симек көндө сыуаштар
Мунса инеп таҙарған).
Суҡтай кейенеп, ярты ауыл
Сыҡты урам буйына,

Ҡитте, гөжләп, сыуаштар
Үрге остоң туйына.
Үрге оста туй бара
Гөрләп тора бар ауыл.
— Туй тиһәң дә, бына туй!
Байҙар туйы шулай шул!

2

Михәдәрҙең йорттары
Алыҫтарҙан күренә.
Туйға килгән ҡунаҡтар
Тышта һәм өй түрендә.
Ҡура тулы, өй тулы,
Берәү сыҡһа, биш керә,
Йәштәр ҡарай уйынды,
Ҡарттар һыра һемерә.
Шобор уйнай шоборсо,
Һай, туйы ла, туй икән!
Бейетә лә һикертә
Һай, һыйы ла һый икән!
Шобор туҡтай уйнауҙан,
Арып халҡ шым ҡала.
Йырсылар йыр башлағас,
Бейеүселәр хәл ала.
«Ниңә тынды халҡтар?
Уйнау туйҙың йолаһы!
Уйнағыҙ ҙа йырлағыҙ.
Беҙ — һандуғас балаһы!»

3

Тағы шобор яңғырай,
Моңға тула өй эсе;

Иҙәндәрҙе һығылтып,
Ҡаты баҫа бейеүсе.
Түрҙә оло ҡунаҡтар —
Ҡүпме эсһә лә өндәшмә —
Изге теләк теләйҙәр
Кейәү менән кәләшкә.
Бай, сәләмәт торһондар,
Иш янына ҡуш булһын,
Татыу ғүмер итһендәр,
Дошман һүҙе буш булһын.
Данлы ғүмер һөрһөндәр,
Ҡот һорайыҡ хоҙанан.
Шулай теләк теләшеп,
Бал эсегеҙ, ҡоҙалар!
Ашап-эсеп, ҡоҙалар,
Мәңге бергә булайыҡ.
Ҡыҙ кейәүҙе яратһын,
Туйын данлы туйлайыҡ!
Ҡара, ҡара, ҡоҙаны,
Йәштәрсә күңел аса!
Михәдәр ҡарт эсһә лә,
Ниндәй матур, төҙ баҫа!

4

Бейей кейәү егеттәре,
Ҡемдә дәрт бар шул саҡлы?
Ә ҡыҙҙары уның һайын
Өҙҙөрәләр таҡмаҡты.
Туй бара. Сымылдыҡта,
Бөркәнсекле ҡыҙ бала
Үкһеп илай. Ни өсөн
Өҙөп-өҙөп тын ала?

Аҡ бөркәнсек бөркәнгән.
Битен асмай. Ул — яна,
Үкһеп илай, йәштәре
Бөркәнсегенә тама!
Ҡыҙҙар йырлай, бәхетһеҙлек,
Усал яҙмыш хаҡында.
Ниндәй яҙмыш! Бер ҡарт кеше
Көсләп ала ҡатынға!
— Яҙмыш — сал ҡарт Тахтаман
Кейәү булып киләсәк.
Ҡала һөйгән егете —
Яҙмыш ҡыҙҙан көләсәк.
Ятҡа китһәң, нишләр һуң
Сәтнәр — һөйгән егетең?
Әй, гүзәл ҡыҙ, Нарспи,
Юҡмы ни һуң бәхетең?

5

Ҡәрҙәштәр күп. Туй һыйлап,
Балға, майға күмәләр.
Бер бөтмәçлек туй булды,
Туғарылмай көймәләр.
Көймәләрҙә сабалар,
Ул яҡҡа ла, был яҡҡа.
Нарспиҙе дуç ҡыҙҙары
Йырҙар йырлап йыуата.
Көнөн-төнөн уйнаны,
Шобор уйнап, тынманы,
Буҙа эсеп бейеүҙең
Бөтөр көнө булманы.
Көтөү-көтөү балалар
Туй артынан тартыла.

Бер ҡарт ята тәгәрәп
Таҡта ҡапҡа артында
— Туй бара, һай шәп бара,— ти,
Ә үҙенең ғәме юҡ.
Ятҡан көйө бейеп ята,
Ә торорлоҡ хәле юҡ.

## V. КҮРӘҘӘСЕ ЯНЫНДА

1

Төннөк кенә тәҙрәле,
Мунса һымаҡ өйөндә,
Көл төçөнә әйләнгән
Ҡарт ултыра мөйөштә.
Тик ишекте асҡанда,
Төштө өйгә яҡтылыҡ,—
Төн шикелле, өй эсе
Ҡитә ҡапыл яҡтырып.
Ҡарт ултыра мөйөштә,
Мыштыр-мыштыр ҡашына.
Сабатаһын ҡайтарып

Һалып ҡуйған ҡаршына.
Бына ҡояш яҡтыһы
Төштө өйҙөң эсенә,
Яҡтырҙы сал ҡарт башы,
Ҡояш төшкәс сәсенә.
Ишектән шат тауыштар
Инеп, асты күңелде,
Тыштан төшкән нурҙарға
Ҡарттың башы күмелде.

2

Яһағанда сабата,
Уйға батып бер талай,
Ҡунаҡ килеп ингәнде
Ишетмәне был бабай.
Тупһалағы ҡарсыҡты,
Бабай ҡалды абайлап,
Күрә: ҡарсыҡ ишектән —
Һаулыҡ һорай бабайҙан.
Был Сәтнәрҙең әсәһе —
Һүҙе рәхмәтле икән,
Зәхмәт тейгән улына —
Улы зәхмәтле икән.
Ҡарсыҡ инеп, яй ғына,
Ҡайғыларын бабайға,
Аһ-зар менән һөйләне,
«Ен тигән,— тип,— малайға».
Һөйләп бирҙе әсәһе
Улдың төҫө киткәнен,
Тамағына ашамай
Һарғайғанын, кипкәнен.

Уртаҡлашып ҡайғыны,
Икәү бергә ҡайғырып,
Һөйләштеләр бик оҙаҡ,
Үткәндәргә ҡағылып.

3

Ҡилештеләр: күрәҙәлек
Итмәксе булды ҡарты,
Бер пар ойоҡ, бер күлдәк
Түләргә булды ҡарсыҡ.
Торҙо бабай яй ғына,
Сабатаһын ырғытты;
Барып ишек бауына
Ҡиҫәү ағасын тыҡты.
Туның кейҙе, кәпәсен
Тыҡты ҡултыҡ аҫтына,
Олтораҡҡа ҡыл һалды,
Тәңкә һалды ҡаршына,
Сәс-һаҡалын һыпырҙы,
Һөйләмәй һис әңгәмә,
Зәғиф күҙен ҡыҫҡылап,
Ҡарап торҙо тәңкәгә.
Ҡарап торҙо-торҙо ла,
Аҡ һаҡалын тырнаны:
Мөңрәй-мөңрәй ҡарсыҡҡа,
Шул һүҙҙәрҙе йырланы:

4

«Ҡиҫкән йөрәк — йәбешмәҫ,
Тишек маңлай уңалмаҫ,

Пулех* үҙе ҡушҡандан
Һис берәү ҙә уҙа алмаҫ!
Биргән уға Пулехсе
Наҙлы күңел, ҡайнар ҡан
Ҡара иткән көндәрен
Ғүмерен ҡыҫҡа яратҡан.
Һыуыҡ көндәр килер ҙә,
Ҡайнар ҡанын туңдырыр,
Боҙло көндәр килер ҙә,—
Йомшаҡ йәне боҙ булыр.
Ҡайнар көндәр килер ҙә
Туңған ҡанды иретер,
Утлы көндәр килер ҙә,
Йомшаҡ йәнде көл итер».

5

Ҡарт бер ваҡыт тын ҡалды,
Оҙаҡ торҙо уйланып;
Тун, кәпәсен ырғытты,
Һиҫкәнгәндәй уянып;
Күҙен теклəп карсыҡҡа
Теҙҙе һүҙҙән теҙмәне,
(Ҡарсыҡ янды йә туңды,
Нишләргә лә белмәне):
«Был хәсрәтте ебәргән —

---

* Пулех, Пулехсе — мәжүсилек аллаһы — һүҙгә-һүҙ тәржемә — бүләк, бүләксе, йәғни бөтә нәмәне бүләк итеүсе көс.

Тәңре Ҡирәмәт* түгел,
Юҡ шауҡымы Йөрехтең**,
Был яман зәхмәт түгел!
Хоҙай яҙмышы, килен,
Килен, был Пулех эше.
Илама, килен, яҙмышҡа
Ҡаршы торалмай кеше!...
Яҙмыш, килен, бер кемгә
Ҡотолорлоҡ эш түгел.
Ҡайғырма, килен, яҙмышы
Үҙе менән кешенең».

6

Өмөт өҙөп, ҡайғынан
Башын эйеп, саҡ атлап,
Сыҡты ҡарсыҡ: ә бабай
Яһап ҡалды сабата.
Яңғыҙ ҡалғас, ҡарт уйлап,
Башын эйеп ултырҙы.
Ғәжәпләнде үҙенә,
Эстән ниҙер уҡынды.
Сабатаһын ташланы,
Үҙалдына һөйләнә:

---

* Ҡирәмәт — уҫал, яуыз рух. Элек сыуаштар кирәмәт исемле ҡарт «изге» ағасҡа табынғандар, уның яуызлыҡ ҡылыуынан ҡурҡып, төрлө бүләктәр бирә торған булғандар. Хәҙерге көндә лә сыуаштарҙың тел әҙәбиәтендә кирәмәт тураһында күп кенә легендалар һаҡлана.

** Йөрех — яуыз, уҫал рух. Мәжүсилектән ҡалған.

— Нисек булды һуң былтэш?
Ни булды,— ти,— миңә лә?
Быға тиклем кем килһә,
Ҡарай, өшкөрә инем,
Ялған һөйләп, йыуатып,
Оҙата бирә инем.
Нисек булды һуң бөгөн?
Һуш йыя алмай торамын.
Алданыммы? Йә, хоҙа!
Әллә хаҡты юраным?

## VI. КАСЫУ

1

Ерҙе ҡара төн баҫты
Силби тынлыҡҡа батты.
Туй таралды. Таңғаса
Ҡарттар йоҡларға ятты.
Йәш егеттәр, йәш ҡыҙҙар
Тағы уйынға сыға...
Сыҡты моңһоу Нарспи ҙә
Ҡыҙ сағын оҙатырға
Ете ятҡа киткәнсе,
Сәтнәрен күрге килә,
Һуңғы тапҡыр хушлашып,
Уға ҡул бирге килә.
Ана Сәтнәр. Ҡарашы

Йөрәкте өҙә икән.
Ҡеше шундай ҡайғыға
Түҙһә лә түҙә икән.
Бына уйын таралды,
Төн яртынан ауышҡас.
Был хәсрәттән үлгәнсе,
Үлеү хәйер, ҡауышҡас...

2

Томанланды йондоҙҙар,
Эңер түбәнгә ятты.
Урман, ауыл, һыу өҫтөн
Ҡара болоттар япты.
Ҡөслө йәшен, шәп ямғыр,
Ҡара урман үкерә.
Ас бүреләй, ел олой,
Ел һыҙғыра, ел өрә.
Бер туҡтауһыҙ күкрәй күк.
Йәшен. Урман яҡтыра.
Берәү урман эсенән
Атын туҡмап саптыра.
Атта икәү. Тәҡдир бер.
Тәҡдир төҫлө, ат ҡара.
Ул йонсоно. Бер туҡтап,
Берсә юртып, саҡ бара.
Юлсыларҙы, баш эйеп,
Сәләмләй ҡарт имәндәр.
Ҡыштырҙаша япраҡтар:
— Хәйерле юл! — тигәндәй.

3

Үтеп китте шомло төн
Ер яҡтырҙы, таң атты,

Туй уяна. Инде бит
Уянырға бик ваҡыт.
Ҡунаҡ килер хужаға
Ваҡыт туйҙы башларға.
Ваҡыт йырлап бейергә,
Эсергә һәм ашарға.
Ләкин шобор тауышы
Яңғырамай ауылға.
Шоборсо юҡ, һыра юҡ,
Үрге оска ни булған?!
Халҡ батҡан тынлыҡҡа,
Ниндәй ирмәк тамаша?
Ҡара өйҙә, зыҡ ҡубып,
Ҡарт һәм ҡарсыҡ талаша.
Оят! Хурлыҡ! Ҡыҙ бит юҡ!
Быуа ышан йәштәргә!
Ҡис уйындан ҡыҙ ҡасҡан
Эйәргән дә Сәтнәргә.

4

Ҡыуа киткән өс сапҡын
Ары-бире елдерә,
Һәр һуҡмаҡты, соҡорҙо,
Һәр ҡыуаҡты тикшерә.
Тауыш тыңлап туҡтайҙар,
Төшөп эҙҙе ҡарайҙар.
Ямғыр йыуған эҙҙәрҙе,
Аптырайҙар ағайҙар.
«Ҡояш ҡына сыҡһын!» — тип,
Теш ҡыҫалар асыуҙан.
Ләкин урман бик ҡалын,

Ирк ҡуйған ҡасыуға
Ингән һайын урманға,
Ҡүңелдә шик ярала.
Ҡояш сыҡты, тик эҙ юҡ,
Ышаныстар тарала.
Аҡ күбеккә батырып,
Аттар туҡмап, тапанып,
Шырлыҡ үтте сапҡындар,
Ләкин эҙҙе тапманы.

5

Бер ҡарт имән төбөндә
Сәтнәр арып йоҡлаған
Нарспи һөйгән егетен
Нык ҡыҫып ҡосаҡлаған.
Бына Нарспи төш күрә:
Атайы, имеш, алабай
Ул шырлыҡтан сыға ла
Нарспигә абалай.
— Ҡайҙа ҡастың, яуыз ҡыҙ?
Йәнең алам. Тапһаммы?..
Хур иттең бит һин беҙҙе,
Намыҫыбыҙҙы тапаның!
Эт — бүрегә әйләнә...
Ниндәй төш был, и, хоҙай!
Ҡыҙ уяна. Өнөндә
Килеп етә өс һыбай.
— Сәтнәр, Сәтнәр... тоттолар!..
Тор... ай, килеп баҫтылар!..
Ҡасайыҡ, ай беҙ бөттөк...
Килеп етте атлылар!..

## 6

Нарспи менән Сәтнәрҙе
Ҡилтерҙеләр ауылға.
Яуыз эшкә хөкөм көт—
Эләктеләр бит ҡулға!
Ҡарсыҡ, әтәс шикелле,
Ҡунды Нарспи сәсенә.
Ҡарты килеп Сәтнәрҙең
Тондора сикәһенә.
— Әсәй, йәнем, зинһар, тим,
Сәсем йолҡоп, рәнйетмә;
Боҙолған эш төҙәлмәҫ,
Мине шулай әрнетмә!..
— Михәдәр бай, әй, бабай,
Туҡмап файҙа юҡ инде,
Ҡолдән ҡабат ут янмаҫ,
Ни ҡылһаң да һуң инде.
Был һүҙҙән һуң Михәдәр
Тамам ҡыҙҙы, ярһыны,
Бәйле Сәтнәр ҡанына
Мана бирҙе ҡамсыны.

## 7

Ауыл халҡы йыйылып,
Туйҙан яман ҡайнаша.
Сәтнәр ята, һушы юҡ,
Ауыҙынан ҡан аға.
Улын күреп әсәнең
Күҙҙәренә йәш тулды.
Һуштан яҙған улына
Әсә ҡурҡып ынтылды.

Егеттәргә ялбарҙы:
— Өйгә илтә күрсе! — тип.
Ике егет илтте уны,
«Үҙебеҙҙең күрше»,— тип.
Ҡара өйҙә Нарспиҙең
Битен-күҙен йыуалар.
Ҡыҙҙы, көсләп яңынан,
Сымылдыҡҡа ҡыуалар.
— Әй, туй булһын, туй булһын,
Туй күңелһеҙ уҙмаһын,
Ләкин үткән хәлдәрҙе
Яңы кейәү* һиҙмәһен!
Бына был туй — данлы туй!
Ҡыҙыҡ туй һәм... боҙоҡ туй!.

---

* Яңы кейәү. Шағир был һүҙҙе үҙенең маҡсатына ярашлы һайлаған. Нарспи менән Сәтнәрҙең урманда төн үткәреүҙәренән һуң, шағир Тахтамандан «яңы кейәү» тип көлә.

## VII. ИКЕ ТУЙ

1

Ҡояш байыр алдынан
Ҡөн һүрелә башланы.
Ҡиске еләҫ елдәргә
Шаулай ағас баштары.
Асып баҫыу ҡапҡаһын,
Ҡейәү көтә бар ғәләм
«Туй килә!» — тип, шатланып,
Һөрән һалды бер әҙәм.
Шау-гөр килеп, урмандан
Аттар сыҡты бер заман.
Алда, һайыҫҡан һымаҡ,
Сабып килә Тахтаман.
Танау йәмшек, күҙ ҡылый,

Сәс-һаҡалға сал кергән,
Ялпаҡ томһа битенең
Нуры ҡасҡан мәкерҙән.
Ҡара сәкмән, һоро бүрк,
Аҡ сабата — кейгәне.
Аҡ туланан ойого —
Ҡупшы икән кейәүе!

2

Ҡейәү туйы, йырлашып,
Ҡилә урман юлынан.
Ҡаршы ала ҡоҙалар,
Һыра тотоп ҡулына.
Ҡыҙ туйы ла Үрге остан
Ҡилеп сыға ҡаршыға.
Нарспи яулыҡ аҫтында,
Үкһеп туйҙы ҡаршылай.
Нарспиҙең йөрәгендә
Хәсрәт ҡайнай, ут яна.
Ҡарт кейәүен күреп ул
Йәштәр түгеп уфтана.
— Ай, атайым, әсәйем,
Ниңә утҡа аттығыҙ?
Нисек шулай ҡыҙғанмай,
Ете ятҡа һаттығыҙ?
Әй, Тахтаман, Тахтаман!
Юҡ икән дә иманың.
Бирһәм йәнем бирермен,
Ләкин һиңә булмамын.

3

Туйҙы хуплап, бай ҡоҙа
Ҡаршы ала һый менән

Ҡүбекләнгән һыра менән,
Таҡмаҡ менән, йыр менән.
Яңы кейәү Тахтаман
Алды биргән һыраһын,
Менгән аты, уйнаҡлап,
Эсертмәне хужаһын.
Ете кейәү егете
Бай кейәүҙе ураткан,
Ат уйнатып, егеттәр
Йырлап килә урамдан.
Ҡапҡа ла киң, шулай ҙа
Һыйыша алмай арбалар.
Ҡамсы менән һуҡҡылап,
Ҡоймаларҙы яралар.
Ҡоҙа һыйлай. Байҙарҙың
Һөйләмә лә, туй елле!
Ә иртәгә урамда
Булыр шаулы вый-килле*.

4

Ҡоҙалар күп. Кейәү бай.
Өс көн тынманы табын,
Дүртенсе көн ҡунаҡтар
Ҡайыра ҡайтыу яғын.
Кейәү туйы йыйылды:
— Хужалкигә китәйек,
Һеҙҙә туйҙар шәп булды,
Беҙҙә байрам итәйек!

---

* Вый-килле — ҡатын-ҡыҙҙар туйы менән ирҙәр туйының осрашыуы. Бында ҡыҙҙың иптәшәре кейәү егеттәрен, кейәү егеттәре ҡыҙҙың птәштәрен кәмһетеп, хурлап йырлайҙар.

— Ашыҡмағыҙ ҡайтырға,
Туй итәйек, ҡоҙалар,
Аҙна буйы туй итеп,
Байҙар ғына ҡыҙ ала!..
Тағы ҡалып ҡоҙалар
Тәүлек буйы туй итте.
Эстеләр, алйынылар,
Туйҙың ҡәҙере китте.
Шунда ғына ҡоҙалар
Туй итеүҙән тыйыла.
Оҙатырға уларҙы
Бөтә Силби йыйыла.

5

Ауыл сите. Ҡоҙалар
Данлы туйҙан тарала.
Ҡыҙҙы оҙатып, дуҫтары
Зыяратҡаса баралар.
Нарспиҙең янында
Ата-әсәһе тора.
Улар һыҡтай, ә йәштәр
Бейей, йырлай, ҡотора.
Сәтнәр тора бер ситтә,
Үҙ әсәһе янында.
Йөрәгендә ут яна,
Күҙе — Нарспи яғында.
Тиңдәштәре илашып,
Ҡыҫып ҡала дуҫ ҡулын,
Ҡарсыҡ менән Михәдәр
Фатихалай ҡыҙ юлын,
Нәсел-нәсәптәр менән
Улар бергә йәш түгә,

Имеш, ете яттарға,
Ҡитеп барҙың йәш көйгә.
Теге хурлыҡ хаҡында
Әйтмәнеләр бер ни ҙә.

6

Бәхилләшкәс, ҡул биреп,
Ултырҙылар аттарға,
Сәтнәр — утта, һөйгәне
Ҡитә ете яттарға!
Шау-гөж килеп туй сапты,
Яңғыратып урманды,
Ҡешеләр ҙә тын ғына
Ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалды.
Тора Сәтнәр, әсәһе
Һүҙ ҡушмай һис әҙәмгә,
Һөйгәнеңдән айырылыу
Бәрәбәрҙер әжәлгә.
— «Их! Был тормош, был тормош
Үлергәме йығылып?
Ниндәй яҙмыш!.. Һөйгәнем
Китте, ятҡа ҡол булып!..
Ни ҡылырға, нишләргә —
Был бәхетһеҙ баш менән?!
Өҫкә ауған был ҡайғым
Ауыр ҡара ташмы ни?»

7

Нарспи юҡ. Ҡотһоҙ өйгә
Сәтнәр ҡайтты ҡайғылы.
— «Мин яраттым, иркәләнем

Енде яуыз байлығы!
Ҡастыҡ. Ләкин урман да
Һаҡлай алманы тамам,
Йөрәгемде һурҙы ла,
Алып китте Тахтаман.
Һөйөштөк, тик ни файҙа,
Бәхет беҙгә яҙмағас?
Кемгә нәләт уҡыйым,
Ни әйтәйем аллаға?..»
Ике ғашиҡ хаҡында
«Имеш-мимеш» самаһыҙ.
Тик аҡыллы ирҙәр ҙә
Төшөнөргә сараһыҙ.
Инде бөттө, Нарспи
Мәңге күрмәç Сәтнәрҙе,
Ата һатты үҙ ҡыҙын,
Һәләк итте йәштәрҙе.

## VIII. ХУЖАЛКИҘӘ

1

Хужалкиҙә туй бара,
Ҡейәү туйы. Тантана!
Аҡ һаҡаллы Тахтаман
Йәш ҡыҙ алып маҡтана.
Йәштәр бейей тирләшеп,
Туй оҡшаған халҡҡа.
Ҡыҙҙар йырлай, ҡысҡырып,
Тамаҡтары ҡарлыҡҡан.
Ҡисә Силби оҙатты
Нарспиҙе дан менән
Ҡөтә башлай ҡыҙ туйын

Тахтаман ҡарт таң менән.
Ашай-эсә, йырлайҙар,
Күңел таша сиктәрҙән.
Күктә йондоҙ ҡалҡҡас та
Кейәү-ҡыҙҙы бикләрҙәр.
Төрлө-төрлө мут уйҙар
Кейәүҙә дәрт ҡуҙғата.
... Бөгөн төндә аҡ келәттә
Ҡыҙ йәшлеген оҙата.

2

Ике тауҙың араһында
Данлы ауыл Хужалки
Хужалкиҙә дан алған
Тахтаманға сыға кем?
Ул бик бай. Туй һыйынан
Оҙон өҫтәл һығыла.
Һый янында Тахтаман
Ҡыҙҙы көтә шым ғына,
Көн бик иртә, ҡояш та
Яңы сыҡты тау аша.
Тахтамандың башы ауыр
Алға-артҡа ауыша.
Киң далала, алыҫта
Бытбылдыҡтар ҡысҡыра.
Юлға ҡарай Тахтаман
Туй юҡ та юҡ. Эс ҡыра.
Кейәү кейгән аҡ күлдәк
Ник елберҙәй — күр әле?
Ҡыҙ ҡосам тип, ҡартластың
Леп-леп тибә йөрәге.

3

Аттар саба йән-фарман,
Саңға батҡан юл буйы.
Ҡилеп сыға урмандан
Ҡыңғыраулы ҡыҙ туйы.
Ҡашмау кейгән ун еңгә
Ҡүн көймәгә тейәлгән
Ҡырҡ өс арба — ҡыҙ туйы
Шул көймәгә эйәргән.
Тахтамандың урам киң.
Ҡунаҡ тулғас, тар хәҙер.
Ҡунаҡтарға тышта уҡ
Мискә-мискә бал әҙер.
Тахтамандың өйөндә
Һыйланалар ҡунаҡтар.
Араҡы күп, һыра күп,
Йырҙан тона ҡолаҡтар.
Төш етмәгән, көн оҙон,
Әйҙә, эсеп йырлағыҙ,
Төнгә тиклем ваҡыт күп,
Тартынышып тормағыҙ.

4

Күптән көткән төн килде,
Туй туҡтаны. Ҡүмәкләп,
Тахтаманды ҡыҙ менән
Бикләнеләр келәткә.
Оло йоҙаҡ ишектә.
Уныһы шулай тейеш тә.
Тыңларға тип, бер егет
Ышыҡланды мөйөшкә.

Дүрт-биш бала шым ғына
Әйләнәләр келәтте.
— Һәй, оятһыҙ балалар,
Кем,— ти,— шулай өйрәтте?
Егет ҡыуа. Быларҙың
Таралырға сама юҡ.
Үндай әрһеҙ халҡты
Сыбыҡламай сара юҡ.
Мыңғыр-мыңғыр өн килде
Бер саҡ бикле келәттән.
Был Нарспи тауышы...
Тынып ҡалды кинәттән.

5

Нәмә әйткәндер Нарспи.
Шым әйтте. Тик Тахтаман
Ҡаты итеп екерҙе,
Тауышланды бик яман.
— Үҙ башыңа, Нарспи,
Шундай кире булма һин! —
Ти Тахтаман,— онотма,
Хәҙер минең ҡулда һин!
Туй үткәс, тиҙ таныраһың
Иреңдең кем икәнен!..
Минең ҡулда яҙмышың
Эҙләмә лә бүтәнен...
Тағы тынлыҡ. Балалар
Тыңланылар бик оҙаҡ
Үткәрмәне өндө лә
Ишектәге ҙур йоҙаҡ.
Таралышты балалар,
Торҙолар ҙа бер ҡәҙәр.

Хужалкигә таралды
Таң атҡансы был хәбәр.

6

Тыңлаған егет тиҙҙән
Урманлыҡҡа йәшенде.
Ишеткәнен, күргәнен
Күңеленә йәшерҙе.
Тыңлап торған сағында,
Йөрәгенең ялҡыны,
Яҡты осҡон шикелле,
Күҙҙәрендә балҡыны.
Уны берәү күрмәне.
Ҡара төнгә йәшенеп,
Китте инеп урманға
Сәтнәр тигән йәш егет.

7

Боҫо сығып, өҫтәлдә
Майлы бутҡа ултыра.
Ҡунаҡ һыйлай Тахтаман,
Өҫтәл тулған һый тора.
Һыра эсеп, ҡунаҡтар
Етешәләр бутҡанан;
Бына шулай һүҙ башлай
Йомарт кейәү Тахтаман:
— Һый шәп түгел, ҡоҙалар,
Үпкәләшеп китмәгеҙ,
Һыйҙың наҡыҫ булыуын,
Зинһар, ғәйеп итмәгеҙ!

Ҡушҡан булһа, иншалла,
Өҙөлмәбеҙ аш-һыуҙан.
Ҡунаҡ булып, һыйлашып,
Хөр йәшәрбеҙ бар туған.
Иҫергәндәр ҡоҙалар,
Саҡ-саҡ баҫып торалар,
Ә шулай ҙа һүҙҙәрен
Кәрәк яҡҡа бөралар:
— Данлы кейәү, Тахтаман,
Урының булһын йәннәттә.
Татыу ғүмер итегеҙ,
Ҡыҙыбыҙҙы рәнйетмә.

8

Аттар бейей, сапсына,
Баш сайҡайҙар көр аттар,
Йырлап тышҡа сығалар
Ауа-ҭүнә ҡунаҡтар,
— «Әйҙә киттек мал менән...
Аҡ юл бирһен Турыһы.
Һый шәп булды, туй бөттө,
Өҫтән төштө бурысы.
Һыра биреп, бал биреп,
Оҙатып ҡалды бай хужа,
Сабып китте ҡоҙалар,
Ана юлда саң туҙа.
Ҡыңғырауҙар бик оҙаҡ
Ишетелде шылтырап.
Аттар оса уҡ һымаҡ,
Силбигә юл туп-тура.

Оҙаҡ торҙо Нарспи ҙә
Ҡарап туйҙың артынан...
«Тавсы!»* алды ҡоҙалар
Юлсы сыуаш ҡартынан.

* Тавсы — сәләмләп, тәбриклəп ҡысҡырыу.

## IX. СИМЕК ҮТКӘС

1

Үтте симек, үтте туй,
Һүнде байрам шатлығы.
Ҡилде көндәр ҡайғылы,
Бер-бер артлы атлығып.
Һабансылар ер һөрә,
Ҡәҫ теленеп теҙелә.
Нарспиҙең йөрәге лә
Ҡайғыларҙан өҙөлә.
Егет-елән килелеп,
Бесән саба үҙәндә;
Нарспи башы эйелгән
Салғы киҫкән үләндәй.
Ҡыҙыу көндөң ҡояшы

Сәскәләрҙе көйҙөрә.
Ҡайғы уты Нарспиҙе
Һарғайта йәш көйөнә.
Ҡөнөн-төнөн Нарспиҙе,
Аяу белмәй, Тахтаман
Ҡамсы менән һуҡтыра,
Ҡанын эсә шул яман.

2

Сәнтти — шаян йәш малай,
Уйнай, саба көн буйы.
Ҡөйәнтәне атланып,
Ат-ат уйнау — бар уйы.
Сыбыҡ менән ат ҡыуып,
Ҡара туҙан осороп,
Сиған һымаҡ, ҡарайып,
Ҡайта арып кис ҡорон.
Сәнтти кескәй шат малай
Һыйына йәш еңгәгә,
Ҡосаҡлай ҙа шаяра,
Ләкин теймәй теңкәгә.
Ғүмер итә Нарспи
Ҡайғы, йәшкә күмелеп.
Тик Сәнттиҙең уйнауы
Аса уның күңелен.
Сәнтти ҡарай, йылмая,
Нindәй матур күҙҙәре!
Мауыҡтырып еңгәһен
Һөйләй матур һүҙҙәрен.
Ағаһының шул улы —
Был донъяның йәме ул.

Ете йәшлек саф бала
Изге сыуаш йәне ул.

3

Еңгәһенә һүҙ һөйләй
Һандуғастай тел менән:
— Ниңә, еңгәм, һин шулай
Ҡайғылыһың гел генә.
Һөртөп алсы күҙеңде,
Бына яулыҡ, мә, еңгәм,
Һин илаһаң, бик ҡыйын,
Йәшең түкмә лә, еңгәм.
Бала көлә. Шул ваҡыт
Йәшле күҙҙәр нурлана.
Әйтерһең дә ҡайғыны
Алып атты шул бала.
Ул йыуата еңгәһен:
— Һин илама гел генә,
Көлһәң, аҡмаҫ йәштәрең,
Тик һин, еңгәм, көл генә.

4

Тәүге төндө хәтерләп,
Ҡараэсле Тахтаман
Көн-төн туғый, екерә,
Көн дә туҡмай ул һаман.
Илау менән Нарспиҙең
Томаланған күҙҙәре.
Ҡамсы төшкән урындар
Шешкән ҡара күгәреп.
Берәү килде. Сәй эсеп,

Тахтаманға шым ғына —
Быш-быш ниҙер һөйләне.
Нарспи ингәс, тындылар.
Нарспи һыра килтерҙе,
Һыйланылар ҡунаҡты.
Ҡунаҡ китте. Тахтаман
Тағы ҡамсы уйнатты:
— Һин бер ҡәнтәй эт икән!
Сәтнәр менән нишләнең?
Туйҙан ҡайҙа ҡастығыҙ?
Әйт, күҙеңде тишәмен!..

5

Һаман туҡмай Тахтаман.
Бөтә тәне яралы,—
Нарспиҙең был хәле
Китте ауылға таралып.
Бисә-сәсә һүҙ йөрөтә:
— Килен эше мөшкөлдән...
Имеш, Нарспи туйғаса
Илгә һыймаҫ эш күргән...
Ата-әсә балаһын
Ҡуйынында үҫтерә,
Ҡәҙерләй; ә шул ҡыҙҙы
Туҡмай кейәү өҫтөрәп.
Ата-әсә ҡыҙына
Бай кейәүҙе эҙләне.
Байлыҡ шатлыҡ бирмәне,
Кипмәй йәшле күҙҙәре!
Байлыҡ — бәхет түгел ул.
Имеш, шундай зарлы бул.

Бай булғансы, ярлы бул,
Тик мәслихәт парлы бул.

6

Әйҙә, туҡма, Тахтаман,
Ҡатыныңдың йәнен ал!
Ҡәнтәй эткә хисапла!
Уттан ал да һыуға һал!
Нәмә сәсһәң яҙ көнө,
Ҡөҙөн шуны ураһың:
Әйҙә көлһөн халҡтар,
Йәштәр көлһөн, хурлаһын!
Туҡма, туҡма, Тахтаман,
Туҡма көндөҙ, кис, төнөн!
Ләкин... уйла аҙағын,
Иҫкә алма үкенеп!
Шулай үтте өс аҙна,
Йәш түгеп, ҡан аралаш.
Көндәр оҙон, ай кеүек,
Һыҙланы шеш-яралар.
Дүртенсе аҙна башында,
Ерҙә шау-шыу баҫылғас,
Айлы кистә, моң саҡта...
...Юҡ, һуңынан ул хаҡта.

# Х. НАРСПИҘЕҢ ХӘТӘР ЭШЕ

1

Бейек тауҙар артынан
Ҡояш сыға донъяға,
Ҡиң далаға, урманға —
Һәр тарафҡа нур яуа.
Ҡояш менән уянып,
Ҡоштар һайрай урманда.
Яңғыҙ кәкүк саҡыра
Ҡарт имәнгә ҡунған да.
Аҡҡош кеүек, теҙелеп,
Ҡыҙҙар һыуға югерә.
Алтын ҡояш нурҙары

Төшә ҡыҙҙар йөҙөнә.
Йән эйәһе йәй көнө
Ғүмер һөрә шатлыҡта
Тик бер ҡатын йәш тугә
Япа-яңғыҙ аҡ йортта.
Таң атҡас та, ат егеп,
Ҡырға киткән Тахтаман.
Нарспиҙең күңелен
Ауыр уйҙар ҡаплаған:

2

— Атам, әсәм, көсләп һеҙ
Ҡыҙығыҙҙы һаттығыҙ.
Ҡарт Тахтаман өйөндә
Ул һуң бәхет таптымы?
Ҡайҙа һөйөү, мөхәббәт?
Инде сыҙар әмәл юҡ.
Тамсы ҡаным ҡалманы,
Тик әлегә әжәл юҡ.
Ҡартҡа көсләп бирҙегеҙ,
Үкһеп ҡалды йәш егет,
Атай, әсәй, аңлағыҙ,
Һуҡыраям, йәш түгеп,
Ҡарт ир мине мыҫҡыллай,
Уға эттән мин түбән.
Бар бит минең һөйгәнем,
Фәҡир, әммә бер тигән!
Нурым һүнде. Һулыған
Япраҡ кеүек, тән ҡалды,
Ыҙаланған тәнемдә
Сыҡмаған бер йән ҡалды.

3

Ҡартҡа олтан булғансы,
Ҡол булғансы шуға, тим,
Әллә ғәзиз кәүҙәмде
Ташлайыммы һыуға, тим.
Ҡөсләп иргә бирҙеләр,
Яуыз ете яттарға,
Йәрем менән икебеҙ
Йыраҡ ике яҡтарҙа.
Өмөт бөттө. Исемем
Ғәрлек һүҙгә әйләнде.
Атам-әсәм, иркегеҙ
Аяҡ-ҡулды бәйләне.
Ҡөсләп иргә һаттығыҙ
Ниндәй файҙа күрҙегеҙ?
Шомло хәбәр тиҙ етер:
Миңә үлем бирҙегеҙ.
Өмөт бөттө. Исемем
Әйләнде тик мысҡылға.
Һөймәгәнгә бирһәләр,
Һәләкәт ҡыҙ-ҡырҡынға.

4

Бар бит минең һөйгәнем.
Мин дә уға ҡәҙерле.
Ул бит батыр. Дошманға —
Ҡаҙымаҫмы ҡәберҙе?
Миңәме һуң үлергә?
Юҡ! Мин башҡа юл табам.
Үҙ ҡулдарым менән мин

Йәнең алам, Тахтаман!
Тәүәккәллек етерме?
Көс бир, хоҙай, дарман бир,
Дөмөктөрәм залимде.
Пулех! Үҙең ярҙам бир!
Бөтә икән — бөтһөн баш,
Юҡ итәмен залимде
Ғәҙел хоҙай, ташлама,
Беләһең бит хәлемде.
Иман уҡы, дошман зат,
Әҙерләйем киҫкә аш.
Ағыу һалам эсенә,
Дөмөк, һинең йәнең таш!

5

Байҙың йорто — хас тамуҡ,
Икһеҙ-сикһеҙ зар бында,
Ҡан ҡойоу ҙа, йәш түгеү,
Ҡамсы һуғыу — заң * бында.
Ауыр. Уйҙар бутала,
Томанланды күҙ алды,
Асыу ташты йөрәктә,
Шомло уйҙар ҡуҙғалды.
Ҡояш уттай ҡыҙҙыра.
Нурға күҙҙәр сағыла.
Рәхәт сигә бар йыһан,
Бер Нарспи ҡайғыла.
Яланаяҡ, яланбаш,
Сәнтти уйнай ат булып,
Һелтәй-һелтәй сыбығын,

* З а ң — закон.

Сабып инде атлығып.
Килеп баҫты ҡаршыға,
Ҡаты тартып теҙгенде.
Өндәшмәне еңгәһе,
Бала низер һиҙенде.
Бөтә өйҙө бер итеп
Сыкты ла ул әйләнеп,
Аптырағас, тиҙ генә
«Атын» тышҡа әйҙәне.

6

Ялҡын үрләй, йыландай,
Ҡара ҡаҙан тирәләй.
Ашын бутай йәш килен,
Өрә, төкөрә, һөйләнә:
— Етмеш диңгеҙ артынан
Кил, сихырсы Шаппатан*,
Өшкөр-төкөр өйрәмә,
Әжәл тапһын Тахтаман.
Ҡырҡ утырау өҫтөндә,
Һикерә, ти, еҙ бүкән,
Тахтамандың башына
Етер нәмә шул икән.
Утыҙ тауға ашырмын,
Еҙ ҡаҙанды аҫырмын.
Ағыу ҡайнар ҡаҙанда
Тахтаманға яҙғанға.
Ашын болғай йәш килен,
Өрә, һаман мығырҙай,

* Шаппатан ҡарсығы — сихыр менән эш итеүсе, ҡара көс эйәһе.

Ҡаҙан ҡайнай. Ҡаҙанда
Әжәл үҙе бығырҙай.

7

Арып ҡайтҡан Тахтаман,
Ҡис ҡараңғы төшкәндә;
Уны көтөп, быу бөркөп,
Аш ултыра өҫтәлдә.
Ҡашыҡ тотоп, Тахтаман
Түр башына үрләне,
— Тәмле бөгөн ашың,— тип
Маҡтап ҡуйҙы өйрәне.
Ҡапыл: — Ултыр! Аша! — ти.
Бисәһенә баҡырҙы,
Ҡылый күҙен аҡайтып,
Ҡотон алды бахырҙың.
— Тамағым туҡ әлегә...
Өлгөрөрмөн... аҙаҡтан...
Ситкә китте, уфтанып,
Йәнде телгән аҙаптан.
Өйҙән сыҡты югереп,
Өҙөләлер йөрәге,
Ҡарты һоҫа тегендә
Маҡтай-маҡтай өйрәне.

8

Һаман ашай Тахтаман,
Асығыуы ысын да;
«Аша, аша, Тахтаман,
Йәнең бармаҡ осонда!
Тахтаман, һин был кистән

Нарспигә ир түгел.
Көндәреңдең һуңына
Килеп еттең һин бөгөн!..»
— Эй, Нарспи, ҡайҙа һин?
Йоҡом килә, урын һал! —
Бына шулай ҡысҡырҙы
Өй эсенән Тахтаман.
— Ни бәләгә тарыным,
Бөтә тәнем һыҙлана?
Әллә яман арыным? —
Эсем тулы ут яна.
Өйгә инде Нарспи һәм
Урын һалды тиҙ генә.
Ҡарап торҙо кейәүҙең
Үлек кергән йөҙөнә.
Мәңгелеккә йоҡларға
Менеп ятты Тахтаман.
Хырланы ла йән бирҙе.
Тахтаманға шул таман.

9

Өйҙә — тынлыҡ. Ҡара шом
Тамырҙарҙы буйлатып,
Йөрөй һымаҡ. Ҡара төн.
Ауыр уйҙар уйлата.
Ултырғыстар, өҫтәлдәр
Нарспиҙән ҡасалар:
Улар урай мәйетте,
Бер түңәрәк яһала.
Бүлмә буйлап шыуыша,
Йөрөй кеүек нәмәләр;
Ҡараңғыла шым ғына

Һелкенәләр шәүләләр.
Ҡаранды ла Нарспи,
Ҡулын һуҙып, атланы:
— Тәне һыуыҡ, үлгәнме,
Әллә йоҡлап ятамы?
Аттары ас, кешнәйҙәр,
Кем һуң һалыр ашарға?
Кешнәмәгеҙ, малҡайҙар,
Хужа сыҡмаҫ аҙбарға...

10

Ел ҡуҙғалды. Япраҡ шаулай,
Алыҫ урман эсендә.
Болот аша ай яҡтыра,
Бойоҡ нур бар төҫөндә.
Ауыл тып-тын. Бик татлы
Йоҡо сыуаш халҡында.
Тик ябалаҡ ҡысҡыра.
Ситтә, ырҙын артында.
Әллә ҡайҙан, алыҫтан,
Икенсе бер ауылдан
Эттәр өргән тауыштар
Ишетелә лауылдап.
Өйҙән сыҡты Нарспи,
Ҡүләгәләй шыуышып,
Боҫоп үтте ырҙынға.
Төн — төн инде. Төн — ышыҡ.
Инеп китте урманға.
Урманда һуң юл бармы?
Ай сумды ла болотҡа,
Юғалтты бар юлдарҙы.

## 11

Ҡыҙ югерә урмандан,
Тып-тын тирә-әйләнә.
Һәр ҡарасҡы — ҡурҡыта,
Шомландыра һәр нәмә.
Ҡарт ағастар яҡ-яҡта
Ботаҡтарын әйәләр,
Улар шулай юлсыға,
Әйтерһең, юл бирәләр.
Ҡәкере имән төбөндә
Баҫҡанмы әллә шүрәле?
Ана оҙон бармаҡлы
Ҡулын һуҙа, күр әле.
Күтәрелде өйөрмә
Ҡара урман буйында.
Әсе тауыш — бер илай,
Берсә көлә сыйылдап:
— Ана, ана, ҡасҡын ҡыҙ
Ҡасып бара иренән!
Тот, Тахтаман, яуызды,
Тот, алып ҡайт иренән!

## 12

Иртән торҙо, кейенеп,
Сәнтти сыҡты «ат» менән.
Дуҫ еңгәһен күрәм тип,
Инде өйгә атлығып.
Еңгәһе юҡ. Ул ҡайҙа?
Ҡаты йоҡлай Тахтаман.
Уятырға кәрәктер,
Ниңә тормай ул һаман?

Ҡилеп инде бер кеше;
Яман хәлде һиҙҙе лә
Алға-артҡа ҡарамай,
Сығып тайҙы тиҙ генә.
Халҡ тулды. Бындай эш
Һәммәһен шаҡ ҡатырҙы
— Нишләп үлгән Тахтаман?
Ҡайҙа киткән ҡатыны?
Тахтамандан һорама,
Яуап бирмәҫ, мәйет ул.
Ә Нарспи яңғыҙы —
Әллә ҡайҙа? — ғәйеп ул.

## XI. СИЛБИҘӘ

1

Данлы Силби. Бар кеше
Көндөҙ, төн дә — һаман да,
Тиргә батып, ер һөрә,
Иген сәсә яланда.
Көн артынан көн үтә.
Таңдан төнгә ҡәҙәрле —
Сыуаш йәйен ял итмәй,
Һәр сәғәте ҡәҙерле!
Үчүктән* һуң болондо
Сыбарланы күбәләр.

* Үчүк — ҡорбан байрамы. Элек сыуаштар, ауылдан аҡса йыйып, ат, һыйыр кеүек ҙур мал һатып алып, уны симек аҙнаһында күмәкләп урманда һуйып ашағандар. Ғибаҙәт ҡылып, алланан уңыш теләп ялбарғандар.

Бына етте арыш та —
Урак̒та тир түгәләр.
Халк̒ эшле. Шулай ҙа
Ҡуптәрҙең тел осонда,—
Ғәйбәт йөрөй. Арала
Ялған да бар, ысын да.
Яман телдәр Силбиҙә
Уңмаған туй хак̒ында,
Михәдәргә һиҙҙермәй
Һөйләп, көлә хахылдап.

2

Тел — һөйәкһеҙ. Арала
Як̒ын да бар, ят та бар.
Имеш-мимеш хисапһыҙ,—
Буш эсендә хак̒ та бар.
Силбиҙәге бөтә һүҙ
Тахтаманға төртөлә.
Нарспиҙе к̒ыҙғанып,
Сыуаш тәрән көрһөнә.
Алма кеүек баланы
Ҡиптергән, ти, Тахтаман,
Ҡүҙендә, ти, йәш кипмәй,
К̒амсы төшмәй арк̒анан.
Сәтнәр — быны ишеткәс,
Онотто бар донъяһын.
Белдермәйсе һис кемгә,
Менеп сапты юрғаһын.

3

Саба Сәтнәр урмандан
Алдан бара ярһыуы,

Хужалкиҙә дошманы,
Шуға шаша асыуы.
Ҡис тә булған... Ер өҫтөн,
Ҡаплар төндөң ҡараһы;
Ә мин һиңә, Тахтаман,
Үлем алып барамын.
Таң яҡтырыр. Шул ваҡыт
Тахтамандың хаҡында —
«Дөмөккән!» тип һөйләрҙәр
Хужалкиҙең халҡына.
Ҡояш сығыр. Донъяға
Сәселерҙәр нурҙары.
Һөйгәнем менән мине
Һаҡлар Туры урманы.
Ләкин, Сәтнәр, һинһеҙ ҙә
Нарспиең үс алды.
Ул — урманда. Тахтаман
Был донъянан юғалды.

## XII. УРМАНДА

1

Урман шаулай. Түбәндә
Ялбыр болот киҫәге,
Олоп-олоп ел өрә,
Юҡ туҡтарға иҫәбе.
Шүрәлеме, убырмы,—
Сыр-сыу килеп, ен аҙа.
Гүйә улар уҡыйҙар
Тахтаманға йыназа.
Урман шаулай. Әллә күк
Ярылдымы кинәттән? —
Ялт-йолт йәшен яҡтыра,
Ямғыр ҡоя күңәкләп.
Ҡүк күкрәй бик ҡаты,

Бөтә донъя дер килә.
Ямғыр ҡоя. Тигеҙҙә
Һыуҙар ташып эркелә,
Ҡара урман, ҡурҡыныс,
Өйөрмәләп, ел урай,
Әллә гөнаһ ҡурҡыта,
Әллә дауыл йән һорай!

2

— Әй, ҡарурман, ҡарурман,
Ниңә былай шаулайһың?
Әллә туймы итәһең,
Әллә йәнме даулайһың?
Был урмандың шаулауы
Диңгеҙҙән дә ямандыр,
Ҡисер мине, хоҙайым,
Ошо — ахыр замандыр.
Бер башыма урын юҡ,
Ҡайғы төштө өҫтөмә;
Ҡайҙа ҡуям йәнемде? —
Илаһи, бир көс миңә!
Ҡарурманды бер итеп,
Сәтнәр йөрөй тилереп,
— Ниңә, изге Туры, — ти, —
Теләмәнең игелек.
Тар һуҡмаҡтан бара ул,
Һуҡмаҡ ята йыландай,
Әсе йөрәк зарҙарын
Йырлап бара йырында:

3

— Әй, ҡарурман, ҡарурман,
Ниңә былай шаулайһың?
Әллә туймы итәһең,
Әллә йәнме даулайһың?
Их, ҡайғылар, ҡайғылар,
Өҙәһегеҙ йәнемде!
Инде нәмә эшләрем,
Таба алмаһам йәремде.
Ҡесе йәштән күрҙем мин
Фәҡирлек тә, ҡайғы ла.
Әй, яҙмышым, мине һуң
Ниҙәр көтә тағы ла?
Их, йәш ғүмер, йәш ғүмер,
Малһыҙлыҡтан эт ектең,
Малһыҙлыҡтан бигерәк
Ахмаҡ йәндән интектең.
Ахмаҡ йәндәр шәт бер хәл,
Алға баҫты дошманы,
Бер ни түгел ҡан дошман!
Хаҡтыр — Туры ҡушҡаны.

4

Сәтнәр йырлай. Йырҙарын
Ел тарата алыҫҡа,
Ел дә илай ҡушылып
Егеттәге һағышҡа.
Ҡыҙырып үтә ошо йыр,
Урманын да шырлығын,
Һәм Сәтнәргә йыраҡтан
Урап килә зарлы моң:

— Ҡем һуң унда? Ҡем икән
Дөм ҡараңғы урманда,
Йырлап йөрөй, моңланып,
Ямғыр ҡойоп торғанда?
Зарлы тауыш шул тиклем
Илап кемде саҡыра?
Ҡем ул һыҡтай? Сәтнәр, һин
Әллә шаштың саҡ ҡына?

5

Яңғыҙ, ауыр уйҙарға,
Батып торғас бер килке,
Йөрәгенән Сәтнәрҙең
Тағы моңдар эркелде.
— Әй, ҡарурман, ҡарурман,
Ниңә өмөт уяттың?
Туңған йәнде иретеп,
Һин кемдән йыр йырлаттың?
Әй, ҡарурман, ҡарурман,
Мин фәҡирҙе алдатма,
Һөйгәнемә оҡшатып,
Йыр-моң һуҙып алдашма.
Ҡем ул? Ҡайҙа? Тауышы
Үтә таныш тойола.
Ул — яҡынлай. Аяҡтар
Атлауынан тыйыла.
Ах! Алдымда ни күрәм?
Ҡаршы килә бер ҡатын.
Әй, Турының рәхмәте!
— Нарспием, ҡанатым!

6

Был төш түгел! Йәренә
Сәтнәр шулай тап булды.
Һәм ошо саҡ — ел тынған,
Болот киткән саҡ булды.
Ике һөйгән ҡауышты,
Талдар эйҙе баштарын,
Тынды йәмһеҙ ауаздар,
Ҡояш сыҡты шатланып.
Ҡоштар йырлай. Ағаста —
Йым-йым килә ысыҡтар.
Ҡояш алтын нур түгә;
Икәү — сыҡты ышыҡтан.
Артта ҡалды ҡара төн,
Алда матур көн генә,
Айырырға йәрҙәрҙе
Баҙнат итер кем генә?
Сеү! Ботаҡта бер ҡоҙғон
Ҡарҡылданы ҡар ҙа ҡар...
Тахтаманмы әллә шул?
Уның һуң ни эше бар?

## XII. ЛӘҒНӘТ

Тәпәш кенә кескәй өй.
Икәү шунда күҙ ҙә ҡаш —
Сәтнәр менән Нарспи
Ашай бергә киске аш.
Икмәк-тоҙо өҫтәлдә,
Әсә әллә ни ваҡытта
Күршеләрҙән бер тәгәс
Алып ҡайтҡан ҡатыҡ та.
Әсә тора бер ситтә,
Тауыш та юҡ, өн дә юҡ.
Серләшәләр ғашиҡтар,
Гүйә башҡа кем дә юҡ.
Хәтерләйҙәр үткәнде,
Һыу буйҙарын, таллыкты...

Ҡиске әйлән-бәйләнде,
Ҡире ҡайтмаҫ шатлыҡты...
Сеү, ишектең артында
Ике кеше шаулаша.
Михәдәр һәм ҡатыны
Килеп инде даулашып.

Ҡарсыҡ

Күршеләрҙән ишеттек:
Нарспи бында, тинеләр.
Тикшерергә тип килдек
Икәүләшеп төн менән.

Михәдәр

Их, ҡыҙ, ҡы-ы-ҙым, ер бит—һин!
Уйла, кемде үлтерҙең?
Мәңгелеккә һин беҙҙең
Йөҙгә оят килтерҙең!
Ни етмәне? Ни кәрәк?
Мохтажмы һин мөлкәткә?
Сат йәбештең нимә тип
Ошо Сәтнәр мөртәткә?
Атаҡлы бай ҡыҙы һин,
Шул йолҡошҡа тиңме ни?
Ил алдында хур иттең
Сал башымды һин минең.

Ҡарсыҡ

Ни етмәгән алйотҡа?
Хәләл ирен үлтергән!

Сәтнәр менән ни ҡалған
Төнөн ҡасып китергә?!

Михәдәр

Шөкөр итәм! Булдым бай,
Хатта бына тигәне.
Хатта, яуыз Ҡирәмәттең
Уҫаллығы теймәне!
Мәрхәмәтле Пирәшти *
Рәхим бирҙе шул ҡәҙәр —
Данлы, рәхәт йәшәне
Серегән бай Михәдәр!
Миңә Пулех, Үчүк тә
Бирә килде именлек.
Мине ҡояш, күк һөйә,
Тирә-яғым игелек.
Бары һинең арҡанда
Оло башым хур булды,
Барын иттең зил-зәбәр —
Ҡылған эшең шул булды.

Ҡарсыҡ

Ныҡ тет, ҡартым, Сәтнәрҙе,
Тетеп кенә һал үҙен,
Байлыҡҡа ла, ҡыҙға ла
Текләмәһен ас күҙен.

Михәдәр

Һөйөп кенә үҫтерҙем,
Бар теләгең үтәнем

---

* Пирәшти — изге рух.

Төн йоҡомдо йоҡламай,
Мөлкәткә мал өҫтәнем.
Мин тимәнем: «Йонсоном!»
Мин тимәнем: «Алйыным!»
Һөйгән ҡыҙым хаҡына
Келәт-келәт мал йыйҙым.
Бай ир таптыҡ, туй иттек,
Хөр булһын тип тормошоң.
Ә һин йөҙгә төкөрҙөң,—
Рәхмәттәрең шулмы һуң?
Уйлай инем: «Минән дә
Тыныс йәшәр әҙәм юҡ»,
Тыныс йәшәү ҡайҙа ул?
Тыныс үлер әмәл юҡ.

### Ҡарсыҡ

Әрлә, әрлә, ҡыҙғанма,
Ҡыҙғаныуҙан уҙған был!
Кем үҫтергән һуң быны?
Кемгә оҡшап тыуған был?!

### Михәдәр

Иркәләнем, шуғамы
Йәберләйһең атаңды?
Ҡайтһын беҙҙең тыныслыҡ,
Аңла яҙыҡ хатаңды!
Бел, һиңә бит шәфҡәтле
Ата-әсә йөрәге.
Сәтнәр өсөн тыуҙыңмы,
Юҡмы ата кәрәге?

Тыңла ата-әсәңде,
Байлыҡтан да баш тартма,
Байлыҡ — ожмах икәнен
Аңлар хатта ахмаҡ та!

Нарспи

Аҙап — бергә көн итеү
Күңел тартмаҫ йән менән.
Бәхет — түгел байлыҡта,
Бәхет — һөйгән йәр менән!

Ҡарсыҡ

Ниндәй яуыз! Самаһыҙ
Ағыуыңды сәсәһең?
Һанға һуҡмай алланы,
Мыҫҡыл итә әсәһен!

Михәдәр

Харап иттең! Сыҡма ла
Хәҙер әҙәм алдына.
«Фәлән-төгән...» тиерҙәр
Оят сыуаш халҡынан...
Яман тел тик һөйләһен,
Оҙон ҡолаҡ тыңлаһын.
Һин бит берҙән-бер ҡыҙым,
Ниҙәр генә булмаһын,
Һине ташлар хәлем юҡ.
Һинең өсөн йорт асыҡ.
Әйҙә, ҡыҙым, ҡайтайыҡ,

Дөмөкһөн был аласыҡ.
Малым менән йыуырмын
Өҫтөңдәге кереңде.
Бүтән кейәү табырбыҙ,
Әйҙә ҡуҙғал, тор инде.
Ҡөймә, ҡыҙым Нарспи,
Яманатың сыҡһа ла.
Бай күҙенә был саҡта,
Ҡем генә һуң сүп һала!

Ҡ а р с ы ҡ

Әйҙә, кәнтәй, өйгә ҡайт,
Аңлатырмын яҡшыраҡ.
Онот, Сәтнәр, бай ҡыҙын.
Һин — эттән дә шаҡшыраҡ.

Н а р с п и

Атай, әсәй, зинһар тим,
Ҡыҫтамағыҙ, ҡуйығыҙ.
Нисек өйгә ҡайтһын һуң
Яманатлы ҡыҙығыҙ?

Ҡ а р с ы ҡ

Атаһына ни әйтә?
Был шәпләнгән ҡалай уҡ?

М и х ә д ә р

Таҡмаҡлама, ҡуй әле,
Ҡыҙҙы тыңлап ҡарайыҡ.

Нарспи

Мин бит инде тол ҡатын,
Ни хәл генә итәмен?
Бер яуыздан ҡотолоп,
Ҡотәйемме бүтәнен?
Юҡ, атаҡай, тупһаңа
Аяҡ баçыр ғәрем юҡ,
Атым яман. Яҙыҡ ҙур.
Башҡа һөйөр йәрем юҡ.
Әрләһәң дә, һүкһәң дә
Мәңге унда ҡайтмайым.
Ҡайтмаç рәхәт йәшлегем,
Мин ҡайтһам да, атайым!
Үçтерҙегеҙ һеҙ мине,
Гөлдәй итеп баҡсала.
Ләкин үçкәс, һаттығыҙ,
Ҡыҙыҡтығыҙ аҡсаға.
Мин бит, үкһеп, ялбарҙым,
Ерҙәр үбеп, инәлдем,
Тик ҡарғышын ишеттем
Ғәзиз ата-инәмдең.
Атай, ярһып, әрләне,
Әсәй йолҡто сәсемде.
Күрҙегеҙ бит, ни саҡлы
Түктем ҡанлы йәшемде.
Үçтерҙегеҙ иркәләп,
Бала саҡта һөйҙөгөҙ,
Йәнем нәмә теләһә,
Барын эшләй инегеҙ.
Үçеп буйға еткәстен,
Белмәнегеҙ күңелде.
«Ҡөтөгөҙ тик бер йыл»,— тип,

Ҙар иланым түгелме?
Сәстәремдән тарттығыҙ,
Әрләнегеҙ, ҡаҡтығыҙ,
«Йөрәгеңдә ни бар»,— тип
Һораны һуң ҡайһығыҙ?
Атай, һөйгән ҡыҙыңды,
Һаттың йыртҡыс бәндәгә.
Ни булһа ла, эш үткән,
Һуң инде был әңгәмә.
Һуҡтырыусы булдығыҙ
Фажиғәле сәғәтте.
Юҡ, беҙ түгел, һеҙ, атай,
Енәйәткә сәбәпсе.
Атай, бирһәң фатиха
Сәтнәремә барырға,
Мин ант итәм, ата-әсә
Ҡоло булып ҡалырға.

Ҡ а р с ы ҡ

Ишеттеңме һүҙҙәрен?
Сәбәпсеһе — бер Сәтнәр.
Биттәренә төкөр ҙә,
Әйҙә, ҡайттыҡ, Михәдәр!

М и х ә д ә р

Һиндә, Сәтнәр, бар ғәйеп,
Белермен мин үс ала;
Ә һин дөмөк, Нарспи,
Ошо ҡара мунсала.
Тешләп булмай терһәкте,

Яҡын ғына булһа ла,
Төшөр эле иҫеңә,
Ләкин ҡара... һуңлама...
Әйҙә, ҡарсыҡ, ҡуҙғалдыҡ,
Өйгә ҡайтыу хәйерле,
Ҡыҙыбыҙҙы, күрәһең,
Сихырлаған хәйерсе.

Ҡарсыҡ

Тонсоғоғоҙ, кибегеҙ,
Дөмөктөрһөн сир, үләт,
Һөйәгегеҙ серегән,
Ләғнәт һеҙгә, мең ләғнәт!

Ҡарғай-ҡарғай киттеләр,
Улар тына буламы?
Нарспи ҡапҡа төбөндә
Үкһеп-үкһеп илаңы.
Ҡояш батты, бойоғоп,
Көндөҙ күргән яфанан...
Һыҡтай Сәтнәр әсәһе:
— И балалар, и заман...

## XVI. ДҮРТ ҮЛЕМ

1

Силби халҡы яланда
Көндөҙ эшләп йонсоған
Ауыл тып-тын. Таңғаса
Ул уянмаҫ йоҡонан.
Ҡараңғы төн. Ағастар
Баҫҡан көйө шым тора,
Урман йоҡлай, тау йоҡлай,
Бары щишмә шылтырай.
Ҡара урман ситендә
Ике арба күренде,
Улар, инеп ауылға,

Ҡараңғыла күмелде.
Бына шул саҡ ауылда
Һөрән һалды бер тауыш...
Ҡемдер саба урамда...
Ҡапыл тынды буталыш.
Ә арбалар, ауылдан
Ҡире урманға юл алды.
Тап һин хәҙер эҙҙәрен —
Шырға инеп юғалды...

2

Шау-гөж килә Үрге ос,
Имеш-мимеш ямандан.
Һөрән һалды бер ағай:
— Михәдәр ҡарт таланған!
Ҡарты-йәше — бөтәһе
Үрге осҡа югерҙе:
«Ни булды?» ла, «Ни булды?»
Ләкин яуап бер төрлө
Михәдәрҙең, һепереп,
Йортон талап сыҡҡандар,
Үҙе менән ҡарсығын
Турап баҙға тыҡҡандар.
Тауыштарын ишетеп,
Сәтнәр килгән ярҙамға.
Турағандар уны ла
Яҡларға, тип, барғанға.
«Ах! Ух!..» килә кешеләр,
Бер нәмәгә төшөнөп.
— Тахтамандың инде был
Туғандары эшелер.

3

Үлде ғорур Михәдәр,
Үлде Сәтнәр йәш көйгә,
Аҡыл-аңға һыймаҫ эш,
Бөтә Силби йәш түгә.
Юҡ ҡайғы, юҡ бәхәстәр,
Үлектәр тын; бер яман
Яҙмыш алла ҡаршында
Барын тигеҙ яһаған.
Бына килде Нарспи,
Ҡара шәлен япҡан ул,
Атаһының өйөндә
Таш булған да ҡатҡан ул,
Ул өндәшмәй, иламай,
Тора баҫҡан ерендә,
(Күк боҙ булып күгәргән,
Сейә төҫлө ирендәр).
Гүйә баҫҡан йөрәген
Ауыр тирмән таштары,
Тирмән ташы ярылды —
Аҡырып илай башланы:

4

«Әй әсәйем, әсәйем,
Ниңә мине таптың һин?
Ниңә, тәҡдир, шундай ҙур
Ҡайғы йөгөн таҡтың һин?
Әй хоҙайым, хоҙайым,
Ниңә бирҙең йән генә?
Бирмәнең шул ҡолоңа
Бәхет кенә, йәм генә.

И раббым, өҙләкһөҙ
Ҡайғыларҙа янамдыр.
Зар илаттың. Инде мин,
Ахыры, артыҡ баландыр.»
Илай-илай Нарспи
Сығып китте ырҙындан,
Шәүлә кеүек, уҙҙы ул
Тармалыҡтар ҡырынан.
Ҡүршеләре артынан
Ҡүмәк ҡарап ҡалдылар.
Уны, күҙҙән юғалтҡас,
Оҙаҡ иҫкә алдылар.

5

Ҡилеп етте аҙна көн.
Сыуаш был көн ял итә.
Йәш-елкенсәк уйында
Бейеп, ерҙе һелкетә.
Тик был юлы йәштәр ҙә
Уйын-көлкө ҡорманы.
Шоборсо ла шоборон
Ҡөйгә һалып торманы.
Ҡарттар бергә йыйылып,
Вата бөгөн баштарҙы:
Етем йорт-ер хаҡында
Һүҙ ҡуйыртыу башланды.
Нарспи юҡ. Нишләргә?
Тәрән уйға баттылар.
Эҙләнеләр. Сапҡындар
Тапмай кире ҡайттылар.
Бөтә Силби йыйналды
Мәйеттәрҙе күмергә,

Өс мәйетте, кәңәшеп,
Ҡуйҙылар бер ҡәбергә...

6

Төш ваҡыты еткәндә
Яңы хәбәр таралды:
Йөрәктәргә шул хәбәр,
Бысаҡ булып, ҡаҙалды.
Эҙләүселәр был юлы
Ҡайтып хәбәр иттеләр.
Асылынған тирәккә
Нарспи сүс еп менән.
Ҡарт тирәктең төбөнә
Уны шул көн күмделәр,
Ә ҡәберен уратып,
Талдан ситән үрҙеләр.
Ҡояш батты ҡыҙарып,
Ергә ятты ҡара төн.
Ауыл тынды. Күп үтмәҫ,
Ал таң йәйер ҡанатын;—
Шунда сыуаш уяныр,
Ҡыр эшенә ҡуҙғалыр,
Ҡарап ҡәбер яғына,
Нарспиҙе ҡыҙғаныр.
Килде китмәҫ ҡара төн
Һалҡын, ҡыҫыҡ ҡәбергә,
Хәҙер унда юлдар юҡ
Хатта ҡайғы, йәбергә.

7

Тәңре бирҙе күп ҡайғы,
Бирҙе әммә аҙ ғүмер,

Утта көйҙө күбәләк —
Ҡалды бары көл-күмер.
Бер хоҙаның ҡөҙрәте
Ирк һөйөр аң бирҙе,
Йәшләй һулыр тәненә
Ҡайнап торған ҡан бирҙе.
Таң күгенә нур һипкән
Йондоҙҙай, ул балҡыны,
Шул йондоҙҙо һүндерҙе
Аҡса, байлыҡ, дан ҡоло.
Йәшләй үлгән ил ҡыҙы
Ята һалҡын ҡәберҙә,
Уның моңло йырҙарын
Йырлай сыуаш хәҙер ҙә.
Эҫе көндә кешеләр
Шул ҡәбергә киләләр,
Уның ҡара тупрағына
Шишмә һыуы һибәләр.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


*К. В. Иванов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3

I. Силби ауылында . . . . . . . . . . . 7
II. Нарспи . . . . . . . . . . . . . . . . . 14
III. Симек кисе . . . . . . . . . . . . . . 21
IV. Туй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31
V. Күрәҙәсе янында . . . . . . . . . . 36
VI. Ҡасыу . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
VII. Ике туй . . . . . . . . . . . . . . . 48
VIII. Хужалкиҙә . . . . . . . . . . . . . 54
XI. Симек үткәс . . . . . . . . . . . . 61
X. Нарспиҙең хәтәр эше . . . . . . . . 66
XI. Силбиҙә . . . . . . . . . . . . . . . 76
XII. Урманда . . . . . . . . . . . . . . 79
XIII. Ләғнәт . . . . . . . . . . . . . . . 84
XIV. Дүрт үлем . . . . . . . . . . . . . 93

*Кәҙерле уҡыусылар!*

Был китап тураһындағы фекерегеҙҙе һәм теләктәрегеҙҙе ошо адрес менән яҙып ебәреүегеҙҙе һорайбыҙ:

*г. Уфа, улица Сталина, 53, Башкирское книжное издательство.*

*Константин Васильевич Иванов*

НАРСПИ

(на башкирском языке)

Издательство редакторы *Х. Т. Бикколов*
Художество редакторы *А. А. Астраханцев*
Техник редакторы *Р. Ш. Рәхимов*
Корректоры *Р. Г. Чураева*

Наборға бирелде 30/III. 1960 йыл. Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.V. 1960 йыл. Ҡағыҙ форматы 70×92[1]/[32]. Физ. баҫма табаҡ 3,125. Шартлы баҫма таб. 3,66. Учет.-изд. таб. 3,53. Тиражы 2000 экз. Изд. № 64. Заказ № 82. Хаҡы: 1 һум 80 тин.

Башҡорт АССР-ы Культура министерствоһының Башҡортостан китап издательствоһы. Өфө, Сталин урамы, 53.

Башҡорт АССР-ы Культура министерствоһының „Октябрь натиҫкыһы" типографияһы. Өфө, Сталин урамы, корпус 43.

61. I. 1961 года
цена — р. 18 к.

8.

Хаҡы: 1 һум 80 тин.